ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

17-23 ғинуар (һыуығай) 2015

№3 (629)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Дошмандарыңды...** дуҫҡа әйләндереп ең! 3



**Башҡортостанда йәшәп...** башҡорт телен белмәү - хурлыҡ 4-5



**Туған тел мөхитен юғалтһаҡ,** йән йылыһын юғалтасаҡбыҙ 8-9

**Кем замандың геройы?** 11-16



**ТВ-программа** 14

*Үҙебеҙ һау-сәләмәт булһаҡ та, ауырыуҙарҙың аяҡ аҫтында сыуалып йөрөүен онотмайыҡ; тормошобоҙ етеш булһа ла, фәҡирлектәрҙең дә артыбыҙҙан ҡалмай эйәреп йөрөүен хәтерҙән сығармайыҡ; үтер юлдарыбыҙ әле үтелмәгән, тип уйлаһаҡ та, ғүмерҙең һәм һәр минуттың ҡәҙерен белергә кәрәклеген күңелебеҙгә һалып ҡуяйыҡ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан Республикаһында булдырылған "Ата-әсә каһарманлығы" миҙалына кемдәр лайыҡ тип уйлайһығыҙ?

***Фәнис ИСХАҠОВ, иҡтисад фәндәре кандидаты, РФ газ сәнәғәтенең почетлы хеҙмәткәре:*** Башта уҡ шуны әйтергә кәрәк: ниндәй генә награда булмаһын, иң тәүҙә бүләкләнеүсенең шәхси сифаттары, холоҡ-фиғеле һәм тормош рәүеше күҙҙән үткәрелергә тейештер, моғайын. Ә инде был осраҡта - бигерәк тә, сөнки өлгөлө балалар тәрбиәләү өсөн үҙенә һәр яҡлап өлгө булыу кәрәк бит. Тағы ла шуныһы мөһим: наградаға тәҡдим ителеүсе ата-әсәнең кәм тигәндә өс бала (үҙ балалары) тәрбиәләүе мотлаҡ булһын, тип ҡарайым. Унан да күберәк икән, бигерәк һәйбәт. Тәрбиәгә, опекунлыҡҡа алынған балалар булыуы ла ихтимал, тик был ата-әсәнең матди ҡыҙыҡһыныуҙан сығып башҡарылған ғәмәле генә була күрмәһен. Үҙендеке - үҙәктә, тигәндәй, үҙ балаларынды кеше итергә былай ҙа бөтөн көсөңдө һалаһың, ә бына тәрбиәгә, опекунлыҡҡа алған балаларҙы ла аҡыллы, тәүфиҡлы, белемле, Тыуған илен, туған телен өҙөлөп һөйгән граждандар итеп үҫтереү өсөн икеләтә көс түгергә тура килә ата-әсәгә. Шуға ла "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалына тәҡдим ителеүселәргә ошо күҙлектән дә баһа бирелергә тейештер: ғаиләлә бөтөн балаларға ла тигеҙ ҡараш бүленәме?

***Миңзифа ИШДӘҮЛӘТОВА, уҡытыусы:*** Республикабыҙ кимәлендә бындай миҙал булдырыу күптән кәрәк ине, бала һәм ғаилә тәрбиәһендә бик дөрөҫ сәйәсәт булмаҡсы был. Маҡтау билдәһенең тап ана шул тәрбиә мәсьәләһенә йүнәлтелгән булыуы шарт, тип уйлайым үҙемсә, сөнки ҡасан ғына әле беҙ "урам тәрбиәһе" тип һылтанырға ғәҙәтләнгән булһаҡ, бөгөн күпселек баланы виртуаль донъя - интернет "тәрбиәләүенә" лә күнегеп киләбеҙ. Тәрбиә функцияһы уҡытыусыларҙың берҙәм һәм өнһөҙ ризалығы менән шым ғына мәктәп иңенән алып ташланды. Элекке кеүек, тәртип боҙған, дәрес ҡалдырған, икеле алған уҡыусыларҙы бар мәктәп алдына баҫтырып ҡуйып тикшереү, оялтыу, намыҫҡа саҡырыу, билдәле дата һәм байрамдарҙа тантаналы саралар үткәреп, өлгөлө шәхестәрҙе саҡырып, уҡыусыларҙа батырлыҡ, илһөйәрлек, ярҙамсыллыҡ кеүек сифаттар тәрбиәләү онотолдо, был турала ауыҙ асып ҡына ҡара: үҙҙәрен бик аҡыллыға иҫәплəгән ҡайһы бер йәшерәктәрҙә ундай хәтирәләр хәҙер мыҫҡыллы йылмайыу ғына тыуҙыра. Тәрбиә эше тулыһынса ғаилә ҡарамағына тороп ҡалды. Был, бәлки, дөрөҫтөр ҙә, ләкин баланың күпселек ваҡытын мәктәптә, тиҫтерҙәре араһында үткәреүен иҫәпкә алғанда, бигүк дөрөҫ тип тә әйтеп булмай. Мәктәп барыбер ҙә белем генә түгел, ә тәрбиә үҙәге лә булып ҡалырға тейеш ине. Бала тәрбиәләү бурысының хәл иткес әһәмиәтен аңлап, ғаилә башлыҡтары хеҙмәтен ошондай юл менән баһалау сараһы күрелһә, бик һәйбәт буласаҡ, әлбиттә. Тик был йәһәттән объективлыҡ һәм ғәҙеллек тойғоho юғала күрмәһен, юғиһә награданың положениеһын төшөнөп етмәгән ҡайһы берәүҙәр әле үк, опекунлыҡҡа бала алып ҡараусыларға миҙал һәм аҡса бирәсәктәр икән, тигән хәбәр ҙә тарата башлаған...

(Дауамы 2-се биттә).

ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

## УРАМДА БУРАН БУЛҺА ЛА...

### өйҙәрҙә буран уйнамаһын

**Һауа торошо - урамға ниндәй кейемдә сығыуҙы ғына түгел, ә күпкә мөһимерәк мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҙур роль уйнай. Кешелек өсөн әһәмиәтле тармаҡтарҙың уңышлы эшмәкәрлеге нәҡ һауа торошона бәйле. Беҙ йәшәйешебеҙҙе тәбиғәттең ошо факторына яраҡлаштырып ҡорабыҙ, пландар төҙөйбөҙ һәм уның иртәгә, киләһе айҙа йәки йылда ниндәй "бүләк"тәр әҙерләүен алдан белеү өсөн төрлө ысулдар ҡулланабыҙ. Бының өсөн телевизорҙан әйтелгән йәки интернет селтәрендә урынлаштырылған мәғлүмәтте файҙаланыуҙан тыш, халыҡ "метеоролог"тары - фенологтарҙың да прогнозын күҙ уңында тотабыҙ. Кәзә (ҡуй) йылы беҙгә ниндәй һауа торошо әҙерләгән? Ҡыш ниндәй булыр, яҙ нисек килер? Ошо хаҡта белер өсөн Бөрйән районы Ҡотан ауылында йәшәүсе Әлмира ХӨСНӨТДИНОВАға мөрәжәғәт иттек.**



(Дауамы 2-се биттә).

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БӘҪЕБЕҘҘЕ ТӨШӨРМӘЙЕК!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА, Ҡырмыҫҡалы районы, уҡытыусы:** Бөгөн ҡайһы бер балаларҙың сәме, дәрте, тырышлығы уҡыуға һәм үҙендә камиллаштырыуға түгел, ә матди яҡтан өҫтөнлөккә, тәм-том алып, иптәше алдында маҡтаныуға йүнәлтелгән икәнен күреп йөрәк әрней. Хәйер, уларҙы ғәйепләп тә булмай инде, нимәгә өҫтөнлөк биреүҙе тәү сиратта өлкәндәр аңларға тейеш бит. Улар театрға йөрөргә, йылына бер тапҡыр гәзит-журналға яҙылырға мөмкинлек тапмай, ә егермешәр меңлек телефон алырға аҡса еткерә. Былдай ғаиләлә үҫкән бала рухи байлыҡ туплау, мәҙәнилек тураһында уйланмаясаҡ, илһөйәр ҙә булмаясаҡ, милләтенең киләсәген дә ҡайғыртмаясаҡ. Ә илһөйәрлек ул, ысынлап та, әсә һөтө менән бирелә, тәү сиратта ғаиләлә башлап тәрбиәләнә. Өйҙә ата-әсәй бала менән баштан уҡ туған телендә аралашып, башҡорт әкиәттәрен һөйләп, бишек йырын йырлап үҫтерһә, артабан балалар баҡсаһында һәм мәктәптәрҙә тәрбиә эштәре шул уҡ рухта дауам ителһә, шул осраҡта илһөйәрлекте тәрбиәләргә була, минеңсә. Әгәр ҙә башҡорт балалары "Супермен булам!" тиер урынға "Салауаттай батыр булам!" тип хыялланып үҫһә, үҙебеҙҙең арҙаҡлы шәхестәрҙе, милли геройҙарыбыҙҙы белһәләр, күңелдәренә тыуған ерҙең тәбиғәтенә ҡарата һөйөү һалынһа, улар, һис шикһеҙ, илен һәм телен ҡәҙерләргә өйрәнеп үҫер ине.

Тағы ни әйтергә теләйемме? Башҡа милләттәр араһында бәҫебеҙҙе түбән төшөрмәҫ өсөн шым ғына тырышып эшләргә лә эшләргә кәрәк. Нимә менәндер риза түгелбеҙ икән, артыҡ тауыш күтәреп йөрөмәйенсә, күмәкләп был эште яйға һалыу, ҡулдан килгәнсә халҡыбыҙға файҙа килтереү тураһында уйланырға ине.

Бөгөн ауыл ерендә йәшәүселәр ҙә мәҙәни сараларға, күтәренке рухлы кисәләргә, күренекле шәхестәр менән осрашыуҙарға, йыйындарға ихтыяж булыуын күрә йөрөйбөҙ. Сөнки ауыл клубтарына баш ҡаланан концерт ҡуйырға артистар һирәк килә, театр труппалары спектаклдәр алып килмәй, ауыл кешеләре күп кенә билдәле шәхестәрҙе белмәй ҙә. Ә халыҡты туплау өсөн ошондай саралар, осрашыуҙар бик мөһим. Уй-ниәттәр берекһен, сөнки илебеҙҙе, телебеҙҙе, рухи ҡиммәттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу ниәтендә эшләр өсөн ауылда йәшәүселәр һәм ҡала халҡы бер кимәлдә мәҙәни, белемле, етеш йәшәргә тейеш.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### *Башҡортостан Республикаһында булдырылған "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалына кемдәр лайыҡ тип уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәмилә АЙТУҒАНОВА, күп балалы әсә:*** Аллаға шөкөр, балаларҙы наград өсөн тип үҫтермәйбеҙ, сәләмәт, тәүфиҡлы, уңған булһалар, шунан да оло награда, бәхет юҡтыр ата-әсә өсөн. Миңә "Әсәлек даны" миҙалы биргәндәрендә лә уңайһыҙланып, оялып бер булдым, сөнки күп бала табыуҙы хәҙер күптәр өнәмәй, дәүләттән аҡса алып, эшләмәй ятыу тип ҡарай. Бәхәсләшмәйем, бар ундайҙар ҙа. Ғаилә башлыҡтарының әллә ни маҡтауға лайыҡ түгелдәре лә бар. Ундай ғаиләләр, ғәҙәттә, ярлы була, мәңге етешһеҙ йәшәй, һоранып ғүмер итә, балалары ас йөрөй. Әгәр (Хоҙай ҡушмаһын берүк!) шундай ғаиләләге бала өлкәндәр өйҙә юҡта шырпы менән уйнап, янғын сығарҙы ла бәләкәй туғандарын ут эсенән алып сыҡты, ти. Ошо буламы батырлыҡ күрһәтеү? Үҙ туғандарын кем булһа ла уйлап та тормай ҡотҡарырға ташланасаҡ! Республика гәзиттәрендә 15 йәшлек бер ҡыҙыҡайҙы маҡтап яҙҙылар. Янғынға үҙе сәбәпсе булмаһа ла, ут эсенән туғандарын алып сыҡҡан - был батырлыҡтан бигерәк туғанлыҡ инстинкты түгелме икән? Мин был ғаиләнең башлыҡтарына "Ата-әсә ҡаһарманлығы"миҙалын биреүҙе урынлы булыр, тип иҫәпләй алмаҫ инем, мәҫәлән. Ә ҡыҙыҡайҙың үҙенә, әйҙә, бирһендәр миҙалды - батыр йөрәкле ул, ысынлап та. Тик мин бында ата-әсә ҡаһарманлығын ғына күрмәйем. Миҙал тапшырыуҙар ана шундай аңлашылмаусанлыҡҡа әйләнеп китмәһен, тигәндән генә әйтәм. Ә ғөмүмән, батып барыусыны, янғын эсендә ҡалған кескәйҙәрҙе ҡотҡарған балалар бик күп, ундайҙарҙың үҙҙәрен гәзиткә яҙып, телевидениенан күрһәтеп, бүләкләп торалар былай ҙа, был бик һәйбәт.

Тағы бер нәмә: күпләп етем балалар алыусыларға ла миҙал тапшырырҙан алда уларҙы ныҡлап тикшерергә кәрәктер, тип уйлайым, сөнки яңыраҡ ҡына тәрбиәгә алған балаларҙы хеҙмәтсе, эшсе ҡулдар урынына файҙаланған бер опекундар хаҡында ғибрәт итеп яҙып сыҡтылар. Икенсе хәл, әгәр ҙә ата-әсәһе ғаиләһендә иҫәпләнеп тә, бала армияла хеҙмәт иткәндә йә полицияла эшләп, хеҙмәтенә бәйле ниндәйҙер батырлыҡ күрһәтә икән, өҫтәүенә, ата-әсәләре лә бына тигән шәп кешеләр булһа, был ғаилә башлыҡтары миҙалға, һис шикһеҙ, лайыҡ тип иҫәпләйем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

# УРАМДА БУРАН БУЛҺА ЛА...

## өйҙәрҙә буран уйнамаһын

**(Башы 1-се биттә).**



- Кешенең, бигерәк тә ауыл кешеһенең тормошо һауа торошо, тәбиғәт ҡанундары менән тығыҙ бәйле. Шуға күрә йылдың төрлө миҙгелендә лә тәбиғәткә иғтибарлы булыу, эшмәкәрлекте һауа торошона ярашлы ҡороу донъя көткәндә ныҡ ярҙам итә. Баҡса эштәренә тотоноуҙың уңайлы мәлен дә, бесәнгә төшөү ваҡыты еткәнлеген дә, бал ҡорттарына бәйле эшмәкәрлекте лә һауа торошо "әйтеп бирә". Шуға күрә йылдың төрлө миҙгелендәге һауа торошона, тәбиғәттәге үҙгәрештәргә ҙур иғтибар бүләм һәм утыҙ йылдан ашыу махсус дәфтәремә теркәп барам. Бөгөнгө көндә, теләк булғанда, хатта алдағы бер йылдың һауа торошо хаҡында белергә була, ләкин үҙең күреп-белеп яҙып ҡуйған яҙмалар күпкә тулыраҡ һәм дөрөҫөрәк мәғлүмәт бирә, минеңсә.

Йылдың һәр миҙгелендә алдағы көндәрҙең хәл-торошон асыҡлау өсөн дәфтәремә күҙ һалам. Шулай, уҙған ҡышҡа ҡарап, алда ниндәй йәй, ә көҙгә ҡарап, ниндәй яҙ булырын һәм шуға ярашлы, йәйҙән - ҡыш, ә яҙҙан көҙ тураһында белергә була. Быйылғы ҡыш сағыштырмаса йылы булыр, тип өмөтләнергә урын бар. Шулай ҙа ҡыш барыбер үҙенекен итеп, ҡаты һыуыҡ көндәре менән өшөтөп аласаҡ. Бигерәк тә ғинуар уртаһында берәй аҙна һауа температураһы бик түбән булыр, тип уйлайым. Ҡар быйыл күп яуасаҡ, сөнки июль-август айҙарында яуым-төшөм күп булды.

Яҙ иртә килһә лә, оҙаҡҡа һуҙыласаҡ, тип күҙаллайым. Сентябрь башында көндәр аяҙ торған, тимәк, март йылы һәм аяҙ һауа торошо менән башланасаҡ. Унан инде көндәр болотлап, ямғырҙар яуҙы, хатта ҡар күҙе лә төштө. Ай аҙаҡтарында ғына көндәр аяҙып, йылынып китте. Шуға күрә март аҙағында йылы көндәр көтөргә мөмкин. Октябрҙә ямғыр, ҡар ҡатыш ямғыр һәм ҡар күп яуҙы, тимәк, апрель айы ла яуым-төшөмгә бай буласаҡ, тип күҙалларға мөмкин. Ләкин яҙ барыбер үҙенекен итеп, ай аҙағына көндәр аяҙып, һауа температураһы күтәрелер, тип уйлайым. Айҙың иң күркәм һәм ғәҙәттәге йылы айы - майҙа буласаҡ һауа торошон ноябрь "билдәләй". Дәфтәргә теркәлгән яҙыуҙарҙан сығып һүҙ йөрөткәндә, май башы йылы буласаҡ. Унан һуң инде ямғырҙар яуып, көндәр һыуып китеүе бар. Шулай ҙа бер аҙҙан һауа торошо яҡшырып, көндәр тағы ла йылый башлаясаҡ.

Йәйҙе аяҙ, тыныс һауа торошо менән ҡаршыларбыҙ, тип ышанам. Ямғырҙар ҙа яуасаҡ. Мәҫәлән, 2014 йылдың 4-5 декабрендә көслө ҡар яуҙы, тимәк, июндең ошо көндәрендә урамға ҡулсатырһыҙ сыҡмау хәйерле буласаҡ. 10-нан һуң көндәр йылып, ай аҙағына тиклем эҫе һауа торошо урынлашасаҡ.

Алдағы ярты йыллыҡҡа ошондай прогноздар бирергә баҙнат итәм. Әлбиттә, килтерелгән мәғлүмәттәрҙе теп-теүәл һәм аныҡ прогноз тип уйлау хата булыр ине, шулай ҙа дөйөм һыҙаттар тура килер, тип уйлайым. Ә икенсе ярты йыллыҡҡа ҡыштың һәм яҙҙың үҙенсәлектәренән сығып күҙаллауҙар эшләргә мөмкин буласаҡ.

Урамда ниндәй генә һауа торошо булмаһын, иң мөһиме, күңелдәрҙә һәм өйҙәребеҙҙә тыныслыҡ булһын, бурандар уйнамаһын.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика йортонда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов федераль һәм төбәк киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе. Рөстәм Хәмитов журналистар менән профессиональ белем биреү мәсьәләләрен, иҡтисади хәлде, халыҡ-ара ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышын, спортҡа ярҙам итеүҙе, Мәҙәниәт йылы йомғаҡтарын тикшерҙе.Киләсәктә лә мәҙәниәт эшмәкәрҙәре өсөн гранттар һаҡланасаҡмы, тигән һорауға Рөстәм Хәмитов ыңғай яуап бирҙе. Ошо маҡсатта 100 миллион һумдан ашыу аҡса бүленәсәк.

✓ Башҡортостанда урындағы эшҡыуарҙарға ярҙам йөҙөнән Көрсөккә ҡаршы штаб булдырыла. Быға килеп тыуған тотороҡһоҙ иҡтисади хәл сәбәпсе. Импорт продукцияһы менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙарға һәм предприятиеларға кисекмәҫтән ярҙам кәрәк. Штаб көрсөк әҙемтәләрен йомшартыу өсөн һаҡлағыс механизмдар әҙерләргә мөмкинлек бирәсәк. Һорауҙар һәм тәҡдимдәр avp-prb@mail.ru электрон почтаһы адресына йәки 8-927-083-23-33, 8-963-133-13-24 телефондары буйынса ҡабул ителә.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте газ-мотор яғыулығында эшләүсе пассажир автобустары һатып алыуға субсидиялар биреү тәртибен раҫланы. Матди ярҙам РФ "Сәнәғәтте үҫтереү һәм уның конкурентлыҡҡа һәләтлеген арттырыу" дәүләт программаһы сиктәрендә даими рәүештә пассажирҙар ташыусы шәхси эшҡыуарҙарға һәм юридик шәхестәргә (дәүләт һәм муниципаль учреждениеларҙан тыш) күрһәтеләсәк. Һатып алынған автобустар хаҡының 50 процентҡа тиклеме субсидияланасаҡ. Субсидиялар БР Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетында тәғәйенләнәсәк.

✓ 27 марттан 5 апрелгә тиклем Ханты-Мансиҙа XVIII ҡышҡы Сурдлимпия уйындары уҙа. Ярыштарҙа донъяның 30 иленән меңгә яҡын спортсыларҙың ҡатнашыуы көтөлә. Уйындарҙа Рәсәй йыйылма командаһында Башҡортостан вәкилдәре лә сығыш яһаясаҡ. БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Уйындар программаһына биш спорт төрө - шайбалы хоккей, тау саңғыһы, сноуборд, саңғы ярыштары, кёрлинг индерелгән.

✓ *Дошман көсһөҙ, ул шуға көнләшә, үртәнә, ә көсһөҙ кеше менән көрәшергә түгел, уға ярҙам итергә кәрәк, ти бөйөк психолог. Йыланды ҡуйыныңда йылытам тип, сағылып ҡуйыуың да бар бит әле…*



УЙЛЫҒА - УЙ…

# ДОШМАНДАРЫҢДЫ…

## дуҫҡа әйләндереп ең!



**Ҡайһы бер кешеләрҙең: "Эй Раббым, дошмандарыма иман килтер, күңелдәренә изгелек орлоғо сәс, уларҙың юлдарына бәхетте, уңышты мул итеп сығарып һал, шуға ҡыуанһындар ҙа мине тыныслыҡта ҡалдырһындар", - тип теләгәндәрен һәр беребеҙҙең ишеткәне барҙыр, моғайын. Ошоға бәйле ике кешенең әңгәмәһен һеҙгә лә һөйләгем килә.**

- Дошмандарыма иман-тәүфиҡ һорай торғас, Хоҙай теләгемде үтәне, шикелле. Ҡапыл улар әллә ҡайҙа булып бөттө лә ҡуйҙы. Шунан миңә рәхәт булып ҡалған тиһеңме? Юҡ шул, киреһенсә, берәү ҙә төрткөләп тормағас, үҙемде нәҫ баҫты ла ҡуйҙы. Бер нәмә лә эшләгем килмәй, яңы үрҙәр яулауға дәртем дә юҡ. Баҡһаң, был дошман тигәндәре бик кәрәк нәмә булған икән даһа, - тип көлдө берәүһе.

- Ул ниндәй дошман тей ул, - тип бүлдерҙе икенсеһе. - Дошман иленде баҫып алған, яҡын кешеләреңдең йәнен ҡыйған әҙәм аҡтығы була. Ә былар...

- Ә былары нимә? - тип эләктерҙе тегеһе. - Недругмы? Неприятелме? Соперник, конкурент, противник, недоброжелатель... Урыҫтарҙа ғына ул, этләшеү кимәленә ҡарап, дошмандың әллә күпме атамаһы бар. Ә башҡорттар был һүҙгә синонимдар уйлап маташмаған. "Дуҫ булмаған кеше" тип теш һындырып тормаҫбыҙ бит. Беҙҙә дошман ниндәй генә булһа ла дошман инде, уның яуызырағын хатта "ҡан дошман" тип ебәрәбеҙ...

Был һөйләшеү мине уйланыуҙарға этәрҙе: ысынлап та, дошман кем һуң ул? Һуғышта билдәле: ул иленә, халҡына ҡаршы ҡорал күтәргән кеше. Ә ҡәҙимге тормошта? Моғайын, һиңә яуызлыҡ эшләргә теләгән кеше, тиһәң, дөрөҫ булалыр. Шундайҙар тормошобоҙға ҡыҫылып, ғәйбәт таратып, яйы сыҡҡан һайын аяҡ салып, арттан бысаҡ ҡаҙап маташа. Дошманлыҡтың нигеҙендә күпселек осраҡта көнсөллөк ята.

Йәшерәк сағымда үҙем насарҙыр, шуға ҡайһы берәүҙәр мине яратмайҙыр, ә яҡшы кешеләр бөтәһенә лә оҡшайҙыр, тип бер ҡатлы уйлағаныма хәҙер көлкөм килә. Хатта бер ваҡыт башҡалар хаҡында насар һүҙ әйтә белмәгән, таш атҡанға ла аш менән яуап бирергә тырышҡан ханымдан: "Һеҙ шундай яҡшы күңелле, шуға һеҙҙе бөтәһе лә ярата лыр ул?" - тип һораным. Ул ғәҙәтенсә йылмайҙы ла: "Бер ваҡыт уҡытыусылар бүлмәһендә оло йәштәге коллегам менән икәү ултырып ҡалдыҡ. Ул оҙаҡ ҡына, өндәшмәй, мине һынсыл ҡараш менән күҙәтеп ултырҙы ла: "Әйт әле, һеңлем, бына һин шундай һәйбәт, бер кире сифатың да юҡ, ә ни өсөн һине шул тиклем күрә алмайҙар һуң?" - тип һораны. Шунан үҙең һығымта яһа инде..." - тине.

Һығымта шул: дошманлы булыу өсөн үҙеңдең ғауғасыл, тотанаҡһыҙ булыуың, кемдәләр мыҫҡыл итеүең йә уға этлек эшләүең мотлаҡ түгел. Был донъяла йәшәүең етә - иртәме-һуңмы, был факт менән килешергә теләмәгән кеше табыла. Хатта һин бөтәһенә ярарға тырышһаң да, һис кем менән дошманлашырға теләмәһәң дә - был кемдер берәүгә оҡшамаясаҡ. Үкенескә ҡаршы, беҙ дуҫтарҙы ғына һайлай алабыҙ, ә дошмандар беҙҙе үҙҙәре һайлай. Хатта меҫкен генә көн күргән, был тормошта бер ниндәй уңышҡа өлгәшә алмаған әҙәмдәрҙең дә үҙҙәренә көнләшкән кешеләр булыуына үртәнеп ултырғандарына күп тапҡыр аптырағаным булды.

Шулай булғас, дошмандар менән нимә эшләргә һуң? Берәүҙәр уларға иғтибар итмәҫкә ҡуша, икенселәр көрәшергә кәңәш бирә, ә дин бөтөнләй "дошманды яратырға, бер битеңә һуҡһа, икенсе яңағыңды ҡуйырға", йәғни күндәм булырға, яуызлыҡҡа ла яҡшылыҡ менән яуапларға саҡыра. Ошо юлдарҙың ҡайһыһы дөрөҫөрәк булалыр, белмәйем, шулай ҙа мин үҙем беренсеһен тоторға тырышам. Ә былай миңә Авраам Линкольндың "Мин дошмандарымды дуҫҡа әйләндереп еңәм", тигән һүҙҙәре оҡшай. Ул, Америка Президенты итеп һайланғас, иң үсле оппонентын оборона министры итеп тәғәйенләй һәм отолмай - улар дуҫтарға әйләнә. Дейл Карнеги ла үҙенең китаптарында дошманды дуҫҡа әйләндереү кәрәклеге тураһында яҙа. Дошман көсһөҙ, ул шуға көнләшә, үртәнә, ә көсһөҙ кеше менән көрәшергә түгел, уға ярҙам итергә кәрәк, ти бөйөк психолог. Әлбиттә, был ҡәҙәрен һәр кем, үҙ көсөнә ышаныуына ҡарап, үҙе хәл итәләр. Йыланды ҡуйыныңда йылытам тип, сағылып ҡуйыуың да бар бит әле...

Әммә тормошонда дошман барлыҡҡа килеү менән бөтәһе лә, был бит бушҡа түгел, тимәк, дөрөҫ йәшәмәйем, һис юғы, нимәнеләр дөрөҫ эшләмәйем, тип уйланырға тейеш. Был тормошта бер нәмә лә осраҡлы түгел, дошман да бушҡа ебәрелмәй. Юҡҡа ғына "Иң яҡшы уҡытыусылар - дошмандар һәм ауырыуҙар" тип әйтмәйҙәр бит. Был ниндәйҙер гонаһ өсөн яза тип аңларға ярамай. Дөрөҫөрәге, нимәгәләр өйрәнергә, яҡшыраҡ, көслөрәк, аҡыллыраҡ булырға бер мөмкинлек тип ҡабул итергә кәрәк. Яҙмыш шул рәүешле уҡыта, ә дошман уҡытыусы ролендә сығыш яһай һәм был дәрестән һабаҡ алмайынса ҡасып ҡотолоп булмай. Үрҙә миҫал итеп килтергән әңгәмә ошо турала ла инде. Юлына арҡыры сығыусылар булмағас, танышыма артабан үҫергә, намыҫланып, хатта үс итеп, яңы ҡаҙаныштарға өлгәшергә стимул, мотивация бөткән дә ҡуйған. Ысынлап та, дошмандар беҙҙең тормошто ҡыҙыҡлыраҡ яһай, уға ярыш, уйын элементтары индерә, сөнки берәү ҙә көсһөҙләгән күрһәтеп, һыр бирергә, еңелеп ҡалырға теләмәй. Кемебеҙ генә "дошман ҡыуанмаһын" тигән һүҙҙәрҙе әйткәне юҡ, йә? Дошманды ҡыуандырмайбыҙ тип, бар мөмкинлектәрен файҙаланып тырышыусылар был тормошта еңеүсе була ла инде.

Шуға был күренешкә алдынғы, уңышлы, даланлы, матур йә һәләтле булыуың өсөн мотлаҡ түләргә тейешле хаҡ итеп ҡарағыҙ һәм, дин өйрәткәнсә, дошманға рәхмәтле булырға, хатта уны хөрмәт итергә өйрәнегеҙ. Бының өсөн баштa уның ыңғай яҡтарын, үҙеңдә булмаған яҡшы сифаттарын күрә белергә кәрәк. Ә улар, эҙләһәң, мотлаҡ табыла. Мәҫәлән, мин дошманлашҡан бер кеше эшҡыуар булып китте, файҙалы эш менән шөғөлләнә, башҡаларға матди яҡтан ярҙам итә, уға рәхмәтле кешеләр күп. Мин, моғайын, күпме теләһәм дә уның кеүек булдыра алмаҫ инем. Уның ошо өҫтөнлөгөн таныу миңә был кешене эстән ғәфү итергә һәм хөрмәт менән ҡарарға булышлыҡ итте. Бәлки, ул мине һаман дошман һанайҙыр, әммә был - уның проблемаһы. Иң мөһиме, мин еңеллек кисерҙем, күңел тыныслығы таптым.

Ә шулай ҙа дошманың барлығын тойоп йәшәү һеҙгә психологик яҡтан яйһыҙ булһа, кәйефегеҙҙе ҡырһа, ысынлап та, Алланан уға изгелек һәм аҡыл биреүен һорарға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр көлөп кенә ҡуйыр: беҙ һорағандан ғына кеше үҙгәреп китергә торамы, тиер. Эйе, үҙгәрә! Йыш ҡына берәйһен күрергә теләһәк, шуны тиҙ арала ҡайҙалыр осратабыҙ ҙаһа. "Бирәм тигән ҡолона - сығарып ҡуя юлына" тип әйтеп тә ҡуябыҙ. Был осраҡлы түгел, Юғары көстөң беҙҙең теләкте үтәүе бит. Шуның ише, кемгәләр яҡшылыҡ теләһәк тә, улар күҙгә күренмәҫ энергетик тулҡындар аша тейешле адресҡа тапшырыла, уның уйҙарын беҙ һораған юҫыҡҡа көйләй. Тик тормош бер шарт ҡуя: һин үҙең дә был ваҡытта күңел төбөнән урғылған ыңғай уйҙар менән һуғарылырға тейеш. Ҡыҫҡаһы, ни сәсһәң - шуны ураһың.

Ахыр сиктә, был тормошта бер килеп дуҫ тигәнеңдең дошманға әйләнеүе йәки, киреһенсә, дошманыңдың дуҫҡа әйләнеүе лә мөмкин бит әле. Ғәҙәттә, бындай хәлдәр ниндәйҙер уртаҡ проблема тыуғанда йә икәүеңә лә бер үк хәүеф янағанда һынала. Шундай саҡта дуҫ тигәнең, үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, "яу яланын" ташлап ҡасты йә һатлыҡ йән булып сыҡты икән - тимәк, ул ысын дуҫ та булмаған. Ә өнәп етмәгән кешең ҡыйын саҡта һиңә иңен терәк итеп ҡуйҙы, ярҙам ҡулын һуҙҙы икән - тимәк, ул улай уҡ дошман да булмаған. Тормош шундай аҡыллы, ул иртәме-һуңмы һәр нәмәне үҙ урынына ҡуя, кемдең кемлеген аңлата, беҙгә унан фәһем ала белергә генә ҡала...

**Рәхимә МУСИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Һөнәри байрам - Рәсәй матбуғаты көнө - айҡанлы 2014 йыл һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәре билдәләнде. Киң мәғлүмәт сараларында дәүләт телдәре һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре проблемаһын яҡтыртыу буйынса республика конкурсында "Киске Өфө" гәзите беренсе урын яуланы.

✓Ошо арала булып үткән Бөтә донъя Википедия көнөндә виртуаль энциклопедияны булдырыусы әүҙем ирекмәндәр был ваҡиғаны флешмоб менән билдәләргә - тыуған ауыл йәки ҡала тураһында мәҡәләгә өҫтәмә индерергә тәҡдим итте. Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нурыев хәбәр итеүенсә, башҡорт ирекмәндәре быны дәррәү күтәреп алды һәм Википедияның барлыҡ ҡулланыусыларын да акцияға ҡушылырға саҡыра. Башҡортостан ауылдары тураһындағы мәҡәләләрҙе башҡорт, рус, татар, сыуаш, ҡаҙаҡ, чечен, әрмән телдәрендәге бүлектәрҙә табырға мөмкин, тип хәбәр итә Башҡорт Википедияһы ирекмәндәре.

✓Мәғариф һәм фән өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт 2015 йылдың Берҙәм дәүләт имтиханы мәсьәләләре буйынса махсус ҡыҙыу линия асты. БДИ-ла ҡатнашыусылар, уларҙың ата-әсәләре, шулай уҡ уҡытыусылар белгестәргә имтихан биреү тәртибе, ойоштороу талаптарына ҡағылышлы һорауҙар менән мөрәжәғәт итә ала. Һорауҙарҙы (495) 984-89-19 телефоны буйынса дүшәмбенән йомаға тиклем иртәнге 9-ҙан киске 5-кә ҡәҙәр бирергә була. Башҡортостанда ла ҡыҙыу линия телефондары эшләй: (347) 218-03-81, 218-03-28, 292-12-70, 216-43-18.

✓Парламент спикеры Константин Толкачев дарыуҙар менән тәьмин итеү һәм уларҙың хаҡы мәсьәләләрен БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың профилле комитетына контролгә алырға ҡушты. Ул "Һаулыҡ һаҡлауҙы яңыртыуға тотонолған бик күп финанс саралары илебеҙ өмөт иткән һөҙөмтә бирмәне" тип билдәләне. Халыҡтан һаулыҡ һаҡлау учреждениелары эшенә бәйле күп ялыуҙар килә. Көн элгәре Башҡортостан парламентарийҙары 8-се ҡала клиник дауаханаһы эшен тикшерҙе.

✓Әҙәбиәт йылында "Китап" нәшриәтендә тәүгеләрҙән булып бөйөк башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 120 йыл тулыуға ҡарата китап баҫылды. "Яҙғы йыр" китабына Ғәзим Шафиҡов тәржемә иткән шиғри һәм проза әҫәрҙәре ингән. Баҫманы Илдар Бабичевтың һүрәттәре биҙәй. Уны нәшриәт магазиндарында һатып алырға мөмкин.

*ИҠТИСАДИ ХӘЛДӘР*

# ҠАҒЫҘҘАҒЫ҇ҺАНДАР - БЕР...

## тормош - икенсе

**Былтырғы иҡтисад өлкәһендә булған хәл-ваҡиғаларҙың ауазы оҙаҡҡа һуҙыласағы көн кеүек асыҡ. Рәсәйҙә ағымдағы йылда нимә көтә? Һум менән нимә булыр? Нефткә хаҡ ниндәй кимәлгә етер? Ошо һәм башҡа күрһәткестәр хаҡында белгестәр төрлөсә фараздар ҡыла. Түбәндә йәшәйешебеҙгә ҙур йоғонто яһаусы 5 төп фактор хаҡында һүҙ йөрөтәсәкбеҙ.**

### Һум

Рәсәйҙә һумдың курсы һорау һәм тәҡдимдән сығып билдәләнә. Әгәр ҙә биржала доллар күберәк һорау менән файҙаланһа, һумдың хаҡы төшә һәм шуға ярашлы рәүештә - киреһенсә. Шул уҡ ваҡытта һорау һәм тәҡдим күп факторҙарға бәйле, шуларҙың иң мөһимдәренең береһе - нефттең хаҡы, сөнки ил бюджетының яртыһы нәҡ нефттән килгән килемдән тулылана. Ағымдағы йылда, иҡтисадсы Игорь Николаев һумдың хаҡы тағы төшөсәк, ә доллар яҙға 70-80 һум торасаҡ, тип күҙаллай. Шулай ҙа рәсми прогноздар өмөтләрәк яңғырай. Улар фекеренсә, һумдың позицияһы тотороҡло буласаҡ. Нефткә хаҡтың күтәрелеүе быға өҫтәмә ҡеүәт бирәсәк, тип фаразлана хөкүмәт даирәләрендә.

### Нефть

Рәсәй бюджеты нефткә булған хаҡты күҙ уңында тотоп төҙөлә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең ил нефткә хаҡтың ниндәй буласағын бер ҡасан да аныҡ белмәй, ә бары тик күҙаллауҙарҙан сығып ҡына эш итә. Ғөмүмән, һумға ҡағылышлы прогноздар яһауға ҡарағанда, нефттең хаҡы тураһында күҙаллауҙар ауырыраҡ, сөнки был тауарға хаҡтың нисек формалашыуын билдәләгән методика юҡ. Шуға күрә ситләтелгән күрһәткестәргә ҡарап ҡына һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Рәсәй тәбиғәт байлыҡтарына, шул иҫәптән нефткә лә бик бай илдәрҙең береһе. Мәҫәлән, беҙҙең илдә бер тәүлектә сығарылған нефть күләме Сәғүд Ғәрәбстаны Әмирлегендә ошо уҡ ваҡыт эсендә сығарылған нефть күләме менән тиңләшә. Сағыштырыу өсөн: 2013 йылда әмирлек тәүлегенә 11,5 миллион баррель нефть сығарһа, Рәсәйҙә был һан 10,8 миллион баррелгә тиң. Нефть сығарыусы башҡа илдәрҙә иһә был һан күпкә әҙерәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй, Сәғүд Ғәрәбстаны кеүек, үҙенә кәрәк саҡта нефть сығарыуҙы кәметеп йәки арттырып, "ҡара алтын"ға хаҡ дәүмәленә йоғонто яһай алмай, сөнки беҙҙең ил донъя аренаһында үҙ аллы "уйынсы" булараҡ сығыш яһай. Ә әмирлек тағы ла 12 ил менән нефть баҙарында үҙенең ҡағиҙәләрен ҡуйыу мөмкинселеге биргән ОПЕК составына инә. ОПЕК иҫәбенә бөтә донъяла сығарылған нефттең 43 проценты тура килә. ОПЕК ағзаларының ойошҡанлы эшмәкәрлеге нефттең хаҡына ҙур йоғонто яһай. Шуға күрә Рәсәйҙең бындай ҙур ойошмаға ҡаршы торорлоҡ һәм, тәбиғи, донъя баҙарында нефттең хаҡын билдәләү мөмкинлеге биргән көсө юҡ. Шулай уҡ Рәсәйҙең, әлеге шул Сәғүд Ғәрәбстаны менән сағыштырғанда, бөгөнгө көндә нефть сығарыуҙы арттырыу өсөн техник мөмкинлеге лә юҡ. Ә ғәрәптәр, теләктәре булғанда, бер тәүлектә сығарған нефть күләмен тағы ла кәмендә 3 миллион баррелгә арттырырға мөмкин. Был да оло әһәмиәткә эйә мөһим фактор. Шуға күрә быйыл да нефткә хаҡтың ниндәй күләмдә булырын Сәғүд Ғәрәбстаны Әмирлеге билдәләйәсәк, тигән фекерҙә эксперттар. Хөкүмәт чиновниктары нефткә хаҡ йылдың икенсе яртыһында күтәрелә башлаясаҡ, тигән ышаныста булһа, Рәсәй Үҙәк банкы иһә нефткә хаҡ ағымдағы йылда ла кәмеүен дауам итәсәк, тигән фекерҙә.

**(Дауамы 5-се биттә).**

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТОСТАНДА ЙӘШӘП...

## башҡорт телен белмәү - хурлыҡ

**Олимпиада һүҙе кемдәләр йәйге һәм ҡышҡы спорт уйындарын хәтерләтһә, мәктәп уҡыусылары һәм уҡытыусылар өсөн ул, тәү сиратта, төрлө фәндәр буйынса уҙғарылған аҡыл һәм отҡорлоҡ бәйгеһен кәүҙәләндерә. Олимпиада барышында һәр бала үҙенең ижади фекерләү һәләтен, стандарт булмаған уйлау кеүәһен аса, булдыҡлылығын яңы бейеклеккә күтәрә.**



Игорь Киняпин фотоһы.

Ошо көндәрҙә баш ҡалала 27-се тапҡыр башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса уҙған төбәк-ара олимпиадала ҡатнашыусылар ҙа үҙҙәренең белем ҡаҙаныштарын башҡа йәштәштәренең уңыштары менән сағыштырыу, ярыш рухын тойоу мөмкинлеген алды. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 9-11-се класс уҡыусылары араһында үткән олимпиадала быйыл 281 бала ҡатнашты. Республика мәктәптәре уҡыусылары менән бер рәттән, Ҡурған, Һамар, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән һәм Татарстан Республикаһынан килгән уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса һәйбәт әҙерлек кимәле күрһәтте. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының милли мәғариф, төбәк-ара хеҙмәттәшлек һәм дәреслектәр баҫтырыу бүлеге етәксеһе Гөлсәсәк Ғиниәт ҡыҙы Мөхәмәтйәнова белдереүенсә, олимпиада һөҙөмтәләре уҡыусыларҙың башҡорт телен һәм әҙәбиәтен яҡшы белеүе хаҡында һүҙ йөрөтөргә мөмкинлек бирә. Был - уҡыусыларҙың телде һәм әҙәбиәтте теләп үҙләштереүе һәм уҡытыусыларҙың йыл дауамында маҡсатлы һәм ныҡлы әҙерлек эше алып барғанлығын күрһәтеүсе фактор.

Олимпиада быйыл өс йүнәлештә - милли мәктәптә башҡорт телен туған тел булараҡ, уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптә башҡорт телен туған тел булараҡ һәм уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусылар араһында айырым уҙғарылды. Тәүге ике төркөмдәгеләр инша яҙыу, тел һәм әҙәбиәткә ҡағылышлы викторина һорауҙарына яуап биреү һәм Мостай Кәрим әҫәрҙәрен тасуири һөйләү буйынса конкурстарҙа көс һынашты. Өсөнсө төркөм уҡыусылары иһә викторина һорауҙары урынына текст менән эшләү оҫталығын, тәржемә итеү йәһәтенән үҙ белемдәрен күрһәтте. Уҡыусылар белдереүенсә, конкурстарҙың береһе лә еңел булмаған. Ҡайһы берәүҙәр өсөн инша яҙыу ауырға төшһә, икенселәр викторина һорауҙарына яуап биреү ҡыйынға тура килде, тип билдәләй. Ә тасуири ятлау конкурсында күптәргә жюри алдында сығыш яһау анһат бирелмәгән. "Әҙерләп килгән әҫәремде яҡшы белһәм дә, ағай-апайҙар алдына сыҡҡас, бер аҙ баҙап, юғалып ҡалдым. Ләкин үҙемде тиҙ үк ҡулға алдым һәм мөмкин булған 10 мәрәйҙең 8-ен йыйыуға өлгәштем", - тине үҙ тәьҫораттары менән бүлешеп Силәбе өлкәһе Ҡорманай урта мәктәбе уҡыусыһы, 9-сы кластар араһында еңеү яулаусы Эльзида Сәйфетдинова.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән һәм әлеге олимпиадаға килгән уҡыусыларҙың эшен баһалап, жюри ағзаһы, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Зәки Әлибаев: "Был балаларҙың эшенә ҡарап, уҡытыусыһы талап иткән өсөн йәки ниндәйҙер билдә алыу маҡсатында ғына түгел, ә телдең бар нескәлеген төшөнөргә тырышып, уны ихлас күңелдән өйрәнергә ынтылыуы хаҡында әйтергә була. Мин бигерәк тә тасуири ятлау конкурсында ҡатнашҡан сыуаш милләтле уҡыусыларҙыңың сығышын билдәләп үткем килә. Мәләүез, Бишбүләк, Бәләбәй районынан килгән сыуаштар башҡорт телендә бер ниндәй акцентһыҙ һөйләшә, шиғырҙар ятлай, уның йөкмәткеһен яҡшы аңлай. Ҡайһы бер башҡорттарға хатта уларҙан өлгө алырға һәм телде белеү кимәле буйынса тиңләшергә ынтылырға ла тырышырға кәрәк", - тине.

Ысынлап та, был төркөмдәге ҡайһы бер уҡыусылар олимпиадала йыл да ҡатнашып, үҙ категорияһында еңеүгә өлгәшә. Быйыл 11-се кластар араһында еңеүсе исеменә лайыҡ булыусы Ейәнсура районы

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле республиканың төньяҡ-көнбайыш райондары буйлап гастролдәргә сыға. Ансамблдең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был юлы легендар коллектив Благовещен ҡалаһында, Архангел һәм Саҡмағош ауылдарында, шулай уҡ Шишмә ҡасабаһында сығыш яһаясаҡ.

✓Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Әҙәбиәт йылы сиктәрендә республиканың мәҙәниәт һәм сәнғәт учреждениеларында ҡыҙыҡлы ваҡиғалар көтөлә. 16 ғинуарҙа Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала "Яныбай Хамматов романдары йондоҙлоғо" виртуаль күргәҙмәһе уҙғарыла. 5 февралдә китапханала студенттар, юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары, яҙыусылар, тәнҡитселәр ҡатнашлығында Таңсулпан Ғарипованың "Әҙәбиәттең юғары миссияһы" ижад лабораторияһы үтә.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Өфө мәктәптәрендә уҡыусы 9-11 класс уҡыусыларының рус теле һәм әҙәбиәте буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына әҙерлек кимәлен тикшереү өсөн тест буйынса һынау уҙғара. Тест буйынса һынау 17 ғинуарҙа көндөҙгө сәғәт 3-тә БДПУ-ның 3-сө корпусының 231-се һәм 409-сы аудиторияларында ойоштирола: Октябрь революцияһы урамы, 3а. 273-38-81, 8-960-384-48-59 телефондары йәки kafedralit@gmail.com электрон почтаһы буйынса яҙылырға була.

✓Башҡортостанда сираттағы декларация кампанияһы башланды, уның барышында граждандар 2014 йылда алған табышы тураһында иҫәп-хисап бирергә һәм һалым органдарына 3-НДФЛ формаһы буйынса декларациялар тапшырырға тейеш. Декларацияны 2015 йылдың 30 апреленә тиклем бирергә була. Бынан тыш, граждандар һалым өсөн тотоп ҡалынған аҡсаға хоҡуҡлы. Декларацияны уҡыу өсөн түләү, ипотека кредиты өсөн проценттар һәм башҡа сығымдар буйынса ташламаға дәғүә итеүсе граждандар тапшыра ала.

✓Губернатор Борис Дубровский һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов инициативаһы буйынса Силәбе өлкәһендә рус һәм башҡорт телдәрендә "Уралым" ижтимағи-сәйәси гәзите донъя күрҙе. Гәзиттең тиражы - һигеҙ мең дана, баҫма ай һайын нәшер ителә. Гәзит Силәбе башҡорттары йәшәгән биләмәләрҙә бушлай таратыласаҡ.

✓ *Олимпиада барышында күңелде ҡырған күренештәргә лә тап булынды. Мәҫәлән, ҡайһы бер башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының уҡыусылары менән тик рус телендә генә аралашыуын ишетеп йән әсене.*

1-се Иҫәнғол урта мәктәбе уҡыусыһы Алина Кириллова ошондайҙар рәтенән. "Яғымлы, матур башҡорт телен 9-сы кластан дәүләт теле булараҡ өйрәнәм. Башҡортостанда йәшәгән һәр милләт вәкиле ошо ерҙең хужаһы, аҫаба халыҡ телен - башҡорт телен - белергә тейеш тип уйлайым. Шәхсән үҙемә килгәндә, башҡорт телен белмәү минең өсөн хурлыҡ булыр ине", - тип үҙ ҡарашын белдерҙе уңған ҡыҙ. Ата-әсәләре башҡа милләт вәкиле була тороп та, балаларҙың башҡорт теленән уҙғарылған төбәк-ара олимпиадала ҡатнашыуы, ғаиләләге телгә ҡарата булған ихтирам хаҡында ла асыҡ һөйләй. Үҙ телендә аралашыуҙан оялған, ситһенгән, балаһына туған телен өйрәтмәгән башҡортҡа өлгө булырҙай бындай миҫалдар.

Белем бәйгеһенә сит өлкәләрҙән килеүселәрҙе абруйлы жюри ағзалары айырым билдәләп үтте. Рәсәйҙең төрлө төбәгендә, бихисап төрлө милләт араһында йәшәп тә үҙ телен онотмай, уны тәфсирләп өйрәнеү яйын тапҡан милләттәштәребеҙгә "Афарин!" тиергә генә ҡала. Быйылғы олимпиадала бигерәк тә ут күршебеҙ, Силәбе өлкәһе исеменән ҡатнашыусылар башҡорт телен һәм әҙәбиәтен яҡшы белеүе менән айырылды. Олимпиаданың өс конкурсы һөҙөмтәһендә нәҡ силәбеләр призлы урындарҙы яуланы ла инде. Ләкин башҡа өлкәләрҙән килеүселәр ҙә һынатмай, барлыҡ конкурстарҙа ла уңышлы сығыш яһаны. Еңеү пьедесталына етергә әҙ генә ҡалған юлды улар киләһе йылдарҙа мотлаҡ уҙасаҡ, сөнки бының өсөн уларҙың барыһы ла - теләктәре, белемдәре, еңеүгә ынтылыштары - бар. Татарстан Республикаһы Яр Саллы ҡалаһынан килгән Эльвина Карамова быйылғы олимпиада уға сәм өҫтәүен һәм киләһе йылда ла ҡатнашырға теләген белдерҙе. Туған телен йәкшәмбе мәктәбенә йөрөп уҡыусы Эльвина ғаиләләрендә тик башҡортса аралашыуҙарын, башҡортса йырҙар тыңлауҙарын һәм башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәре менән танышып барыуҙарын белдереп: "Кеше ниндәй генә төбәктә йәшәмәһен, үҙенең әсә телен белергә һәм балаларына ла өйрәтергә бурыслы. Милләтте бар итеүсе лә, юҡ итеүсе лә - тел, шуға күрә һәр кем туған телен хөрмәт итергә, башҡаларҙан кәм-хур иттермәҫкә тейеш. Теленән яҙған кешенең киләсәге юҡ. Быны барыһы ла ни тиклем иртәрәк аңлаһа, үҙенә лә, халҡына ла яҡшыраҡ буласаҡ", тине. Уның һүҙҙәрен йөпләргә генә ҡала.

Олимпиада барышында күңелде ҡырған күренештәргә лә тап булынды. Мәҫәлән, ҡайһы бер башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының уҡыусылары менән тик рус телендә генә аралашыуын ишетеп йән әсене. Ошо рәүешле улар бала алдында олимпиаданың баһаһын төшөрөүен аңлаймы икән, тигән һорау тыуа. Бындай аҙым уҡытыусының уҡыусыһы менән оҙайлы һәм нығышмалы әҙерлектәр үтеп, уны республика кимәлендәге олимпиадала ҡатнашыуға тиклем алып килеп еткереүе балала телгә ҡарата ихтирам, иғтибар тәрбиәләү теләге түгел, ә үҙ портфолиоһына сираттағы маҡтау ҡағыҙы һалып ҡуйыу өсөн генә эшләндеме икән ни, тигән шиктәргә лә урын ҡалдыра.

Бәйгелә ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, жюри ағзаһы, М. Аҡмулла исемендәге башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусыһы, профессор Әхмәт Дәүләтҡолов: "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһы - ул бөтә республика байрамы. Был сарала ҡатнашыусыларға миллион ярым башҡорттоң күҙе төбәлгән, сөнки һеҙ беҙҙең киләсәк", - тигәйне. Ысынлап та ошондай рухлы, аҡыллы, белемле, телебеҙҙе һәм тарихыбыҙҙы яҡшы белгән уҡыусылар республикабыҙ, халҡыбыҙ терәге. Ләкин олимпиадала милләт ҡалҡаны, илебеҙ таянысы буласаҡ егеттәрҙең әҙ булыуы күҙгә ташланды. Мәктәптәрҙә ошо йәһәттән дә эшмәкәрлек әүҙемләшер һәм артабанғы олимпиадаларҙа ҡатнашыусылар һәм еңеүселәр рәтендә егеттәрҙең дә күберәк булыуын күрербеҙ, тип ышанғы килә. Ә быйылғы бәйгелә тик бер генә егет - башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылының Т. Кусимов исемендәге гимназия уҡыусыһы Сергей Боков ҡына ҡыҙҙарға лайыҡлы ярышташ була алыуын күрһәтеп, еңеүсе исемен яуланы.

Еңеүселәр араһында бер үк мәктәп вәкилдәренең күп булыуы был белем биреү учреждениеларында телгә ҡарата иғтибарҙың көслө икәнлеге тураһында асыҡ һөйләй. Бигерәк тә Әбйәлил районының Т. Кусимов исемендәге гимназияһын, Борай районының 1-се һәм 3-сө урта белем биреү мәктәптәрен, 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын, Өфөнөң М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһын, Ишембайҙың З. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатын билдәләп үтергә кәрәк. Шулай уҡ Әлшәй районы Раевка ауылының М. Буранғолов исемендәге Башҡорт лицейы, Красно-кама районының Яңы Ҡайынлыҡ мәктәп-интернаты һәм Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылының 1-се урта мәктәбе уҡыусылары ла олимпиадала уңышлы сығыш яһаны.

*Мирас ИҘЕЛБАЕВ, Башҡорт дәүләт университеты профессоры, жюри рәйесе:* Мин 11-се класс уҡыусыларының эштәренә баһа биреүсе булараҡ, түбәндәгеләрҙе әйткем килә. Һуңғы дүрт-биш йыл эсендә уҙғарылған олимпиадаларҙың бер үҙенсәлеге бар һәм ул Берҙәм дәүләт имтиханы менән бәйле. 10-сы, бигерәк тә 11-се класта мәктәптәрҙә БДИ исемлегенә индерелмәгән дәрестәргә иғтибар ҡырҡа кәмей. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән хатта һайлап алыу рәүешендә лә имтихан биреү ҡаралмаған, шуға күрә сығарылыш кластарында телгә ҡарата булған битарафлыҡ үҙенең һөҙөмтәһен бирмәй ҡалмай. Әлбиттә, был уҡыусыларҙың да, уҡытыусыларҙың да ғәйебе түгел, ә бәләһе. Шулай ҙа ошондай шарттарға ҡуйылып та, телгә иғтибарҙы кәметмәгән уҡыусылар хупланыуға лайыҡ. Нәҡ ошондай көслө белемле уҡыусылар килә лә инде был олимпиадаға. Әлеге олимпиадала, мәҫәлән, ҡайһы бер иншаларҙы уҡып, хатта күңел тулды. Грамоталы, үҙҙәренең фекерҙәрен еткерә белгән, әҙмә-әҙлекле итеп яҙа алған, дөйөмләштереү оҫталығына эйә уҡыусылар байтаҡ килгән. Викторина, дөйөм алғанда, йомшағыраҡ булһа ла, күп һорауҙарға дөрөҫ яуап биргән киң ҡарашлы, мәғлүмәтле уҡыусылар ҙа етерлек булды. Нисек кенә булмаһын, башҡорт телен үҙенең киләсәге итеп күргән, телде бар күңеле менән яратҡан уҡыусылар өсөн тормошта үҙ урындарын табырға ярҙам итеүсе, этәргес көс булып тороусы, уларҙы алға әйҙәүсе сара булып торған олимпиаданың киләсәге бар һәм ул йәшәйәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр ҡатнашыусының күңелендә онотолмаҫ хәтирәләр ҡалдырған сираттағы башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадаға йомғаҡ яһалды. Бәйгенән һәр кем - уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа - үҙҙәре өсөн фәһем алып, һығымталар эшләп таралышты. Башҡорт теленә һәм әҙәбиәтенә һөйөү мәктәптәге дәрестәр һанының нисәү булыуынан сығып түгел, ә баланың үҙенең туған теленә, сит милләттерҙең ерле халыҡ теленә ҡарата булған хөрмәтенән, иғтибарынан ярала. Зал тултырып олимпиадаға килеүсе уҡыусыларға, уларға башҡорт теле матурлығын һәм байлығын аңлата алыусы уҡытыусыларға ҡарап, телебеҙгә бер ниндәй һынауҙар ҙа ҡурҡыныс түгеллегенә тағы ла бер тапҡыр инандыҡ.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ИҠТИСАДИ ХӘЛДӘР

# ҠАҒЫҘҘАҒЫ ҺАНДАР - БЕР...

## тормош - икенсе

**(Башы 4-се биттә).**

### Инфляция

Былтырғы йыл һөҙөмтәһе буйынса илдә инфляция (тауарға һәм хеҙмәттәргә хаҡтың күтәрелеүе) 11 проценттан артып китте. Декабрҙә хатта аҙналыҡ инфляция кимәле 1 процент булған осорҙар ҙа булды. Илдең Иҡтисади үҫеш министрлығы күҙәтеүҙәренә ярашлы, 2015 йылда инфляция кимәле 7 процент тәшкил итәсәк. Уларҙың күҙаллауын иҡтисадсылар ҙа йөпләй һәм инфляция үҫеше ағымдағы йылда ла һаҡланасаҡ, тип белдерә. Мәҫәлән, бензинға хаҡтың күтәрелеүе һиҙелерлек буласаҡ. Шулай уҡ поезда йөрөү өсөн дә кеҫәнән аҡсаны күберәк сығырырға тура килер, тигән ышаныста улар. Электр энергияһына ла хаҡтар юғарыға үрмәләйәсәк, тип белдерә эксперттар. Әйткәндәй, зәңгәр яғыулыҡ өсөн хаҡтарҙың үҙгәреүе тураһында рәсми белдереү булды ла инде. Тимәк, билдәрҙе тағы ла нығыраҡ ҡыҫып быуырға, тереклек итеү мөмкинлеге биргән тәбиғи ресурстарҙы экономияларға өйрәнергә, ғаилә бюджетына ҙур сығымдар тыуҙырыусы аҙымдар эшләүҙән тыйылып торорға кәрәк буласаҡ.

### Илдең эске тулайым продукты (ВВП)

ВВП - теге йәки был дәүләт биләмәһендә ҡулланыу, экспортлау һәм һаҡлау өсөн етештерелгән бөтә тауар һәм хеҙмәттәрҙең баҙар ҡиммәтен сағылдырыусы макроэкономик күрһәткес. Йәғни илдең Эске тулайым продукт күрһәткесе ни тиклем юғары булһа, унда йәшәү кимәле лә юғарыраҡ, тип аңларға була. Рәсәй иҡтисады бөгөнгө көндә, ВВП күрһәткесе буйынса донъяла 6-сы урынды биләй. ВВП-нан сығып һүҙ йөрөткәндә, АҠШ, Ҡытай Халыҡ Республикаһы, Һиндостан, Япония һәм Германия халҡы беҙҙән яҡшыраҡ йәшәй. Былтыр Рәсәйҙең иҡтисади күрһәткесе, рәсми сығанаҡтарға ярашлы, 0,5 процентҡа артҡан (йыл башында был күрһәткес 1,8 процент буласаҡ, тигән прогноз булғайны). Рәсәй Иҡтисад үҫеше министрлығы быйыл илдең ВВП-һы 0,8 процентҡа үҫәсәк, тип планлаштыра. Ә ҡайһы бер аналитиктар иһә ВВП-ға минус 4 процент юрай, йәғни үҫеш бөтөнләй булмаясаҡ, тип фаразлай.

### Йәшәү кимәле

Алдағы күрһәткестәрҙән сығып ҡарағанда, ағымдағы йылда ил иҡтисады үҫмәйәсәк, тимәк, йәшәү кимәле хөртәйәсәк, тип һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Ҡайһы бер аналитиктар фекеренсә, Рәсәйҙә оҙаҡ йылдар хеҙмәт етештереүсәнлеге бер урында тороуға ҡарамаҫтан, эш хаҡы күләме күтәрелә килде. Бындай һүҙҙәрҙән һуң быйыл эш хаҡының артыуы тураһында хыялланырға ярамай. Әйтергә кәрәк, уҙған йылдың ноябрендә халыҡтың килем күләме 5 процентҡа кәмегән. 1 декабргә ҡарата теркәлгән рәсми эшһеҙҙәр һаны 821800 кеше тәшкил иткән, тип һаналһа ла, реаль һан 4 миллион тирәһе, тип белдерә аналитиктар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыл башланды, тейешле прогноздар эшләнде, хәҙер уларҙың тормошҡа ашырмы-юҡмы икәнлеген көтөргә генә ҡалды. Тик нисек кенә булмаһын, тормошҡа ҡурҡыу баҫҡан күҙҙәр менән түгел, ә айыҡ аҡыл менән ҡарау кәрәктер. Килтерелгән факттар һәм күҙаллауҙар ни тиклем хәүефле тойолмаһын, ҡағыҙҙағы һандарҙың ысынбарлыҡтан күпкә айырылыу мөмкинлеген дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Тормош үҙгәреүен дауам итә. Һәм ул, күп осраҡта, яҡшы яҡҡа үҙгәреүсән. Был бәхәсһеҙ.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ябығам тиһәң...

❖ Консерваланған ризыҡтар ашамаҫҡа, ашағанда ҡабаланмаҫҡа, аппетитты йүгәнләргә. Ас торорға ярамай, әммә печенье, кәнфиткә үрелмәҫкә, ә сельдерей йәки петрушка сәйнәргә кәрәк. Ашарға ултырырҙан 10 минут алда 1 стакан һыу эсегеҙ. Әҙ-әҙләп, көнөнә 5-6 тапҡыр ашау хәйерле. Картуф, ит, балыҡты бешереп кенә ашарға. Ябығыу өсөн дарыуҙар ашау зыянлы, һаҡ булығыҙ.

### Неврастения

❖ Был сирҙән ҡотолоу өсөн көнөнә өс мәртәбә баштың түбәһенә генә 10-15 минутҡа ҡайын ҡайырыһы киҫәге ҡуйығыҙ, һуңғыһын йоҡларға ятырҙан 7-8 сәғәт алда ҡуйығыҙ.

### Ҡышын кәйефте лә ҡайғырт

❖ Иртәнсәк шәкәрле сәй эсергә кәрәк, был баш мейеһен туҡландыра.

❖ Ҡар бик ҙур энергия бирә, шуға күрә ҡарлы урманда йөрөргә кәрәк.

❖ Йоҡо алдынан 20 минут саф һауала йөрөргә һәм 11-се яртынан да ҡалмай йоҡларға ятыу яҡшы.

❖ Душты иртән инегеҙ, сөнки ул йоҡоно аса, кисен душ ҡойонһаң, йоҡлай алмай яфаланырһың.

❖ Ҡалҡан һымаҡ биҙгә ярҙам итергә, уны әүҙемләштереү өсөн йондоҙ сәскә (мокрица) һәм грек сәтләүеге ҡабығынан яһалған төнәтмә һөртөргә кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Бауыр ауырыуҙарынан һаҡланыу

❖ 1 кг киптерелгән инжир, 3-4 лимон, 5-6 ҡалаҡ бал алырға. Инжир менән лимонды ит турағыстан үткәреп, бал өҫтәргә, болғатырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда 2-шәр ҡалаҡ ашарға. Һыуытҡыста һаҡларға.

❖ Көн һайын иртәнге аш алдынан 1 стакан һелтеле минераль һыуға 1 ҡалаҡ бал һалып болғатып эсергә кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Әлбиттә, кейәүгә сығып, яҡшы йәшәр өсөн үҙеңә яҡшы булырға тырышырға кәрәк, шул саҡта һин генә түгел, кейәүең дә һинең ғүмерлек "хеҙмәтсең" буласаҡ, һинең көйөңдө көйләйәсәк.*

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БЕСӘЙ БИТЕН ЙЫУА

**Башҡорттарҙың дини-мифологик ҡараштарында бесәйгә кире ҡараш тойолһа ла, халыҡ ижадында, ырымышаныуҙарында ул ыңғай хайуан булараҡ һүрәтләнә. Хәйерҙе бесәйгә биреү йолаһы ғына ла ошо турала һөйләй.**

Йорттағы бесәй ырыҫ, ҡот, бәхет символы. Бесәй үлән ашаһа, уның хужаһы байый, тигәнде ишеткәнегеҙ барҙыр. Ҡыҙ кеше бесәй яратһа, бәхетле була, тиҙәр. Әгәр ҙә йортҡа башҡа кешенең бесәйе килә икән, шулай уҡ бәхеткә юрайҙар. Шуның өсөн дә яңы йортҡа күскәндә унда тәүҙә бесәйҙе индереү йолаһы бар. Сыуаштарҙа шундай ышаныу бар: өйгә күсенгәс тә, тәүге өс көндә яңы йортта йоҡларға ярамай. Улар был көндәрҙә өйгә бесәйҙе индереп ҡуя. Ошондай уҡ йола хакастарҙа, украиндарҙа, поляктарҙа, немецтарҙа ла бар. Бесәй ятҡан урын өйҙә иң тыныс урын һанала. Йоҡлап ятҡан бесәйҙе тоторға, уятырға ярамай. Ғөмүмән, башҡорттар бесәйҙе рәнйетергә, уға һуғырға тырышмаған. Ғәйнә башҡорттары билдәләүенсә, бер юҡҡа бесәйгә һуғыу берәй бәхетһеҙлеккә, ауырыуға, малдың ҡаҙаланыуына килтереүе ихтимал. Әбйәлил, Учалы яҡтарында әйтеүҙәренсә, хатта әүлиәләр ҙә бесәйҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Ауырлы ҡатындар шулай уҡ бесәй рәнйешенән һаҡланған, сөнки бала өсйән булып тыуыр, тип хәүефләнгәндәр.

Бесәй кешенең ауыртҡан еренә ятып, уның ауырыуын ала, тигәнгә борондан уҡ ышанғандар. Үлемде лә бесәй һиҙә, тик әйтә алмағас, түшәккә ятып аунай икән. Бесәй йыуынһа, ҡунаҡ килә, ул саҡта: "Бесәй битен йыуа, ҡолаҡ арты ҡап-ҡара", - тип, бесәйҙе ишек төбөнә ултыртаһың. Ишекте асҡас та бесәй тышҡа сығып китһә, ҡунаҡ оҙаҡ көттөрмәй; бесәйҙең ҡайһы яҡҡа китеүенә ҡарап, ҡунаҡтың ҡайҙан килеүен юрағандар; әгәр ҙә бесәй асыҡ ишектән сыҡмаһа, ҡуна ятып, оҙаҡҡа килгән ҡунаҡ булыр; әгәр ҙә бесәй түрбашҡа үтә икән, ҡунаҡ ҡатын затынан, өйҙөң урьяғына үтһә, ир кеше булыр. Бесәй тыштан тәҙрәнән ҡараһа, шулай уҡ ҡунаҡ килә. Төштә бесәй күреү изгегә. Юлыңа аҡ бесәй сыҡһа, ул юлда осраясаҡ бөтөн ауырлыҡтарҙы үҙенә ала. Юлды ҡыйған бесәй ҡара төҫтә булмаһа, быны яҡшыға юрайҙар. Юлыңды бесәй ҡыя икән, уны рәнйетергә, ҡурҡытырға ярамай.

Яуыз көстәр ҡара бесәй сүрәтенә инә ала, тигән ышаныу ҙа киң таралған. Бөрйән районында бер ваҡиға тураһында һөйләгәйнеләр. Ҡатыны ауырып киткәс, уға ире Әлмәт күрәҙәне саҡыра. Ул өйгә инеүе була, ҡайҙандыр ҡара бесәй килеп сығып, тәҙрә аша һикерә. Күрәҙәсе уны ҡыуа төшә, бесәй йылға арьяғына ҡасҡансы эҙәрлекләй һәм кире борола. Ауырып ятҡан ҡатын шунда уҡ һауыға башлай.

Төрлө халыҡ әкиәттәрендә бесәй батырҙарҙың ярҙамсыһы булараҡ та сығыш яһай. Был да борон бесәйҙең тотем булыуын асыҡ күрһәтеп тора.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*

# КЕШЕ ҺИҢӘ ЯУЫЗЛЫҠ ҠЫЛҺА...

## кәнфит бир



**Социаль селтәрҙәрҙә Фаина Раневскаяның афоризмдарын яратып уҡыйым. Уның тапҡыр һүҙҙәре күптәргә оҡшай, күрәһең. Оҡшамаған хәлдә лә, бер кем дә битараф ҡалмай, цитаталарға бирелгән комментарийҙарҙан да күренә был.**

Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Ысынлап та, үткән быуатта йәшәгән актрисаның тәрән мәғәнәле һүҙбәйләнештәре, һөйләмдәре, төртмә һүҙҙәре, уҫал шаяртыуҙары бөгөн дә актуаллеген юғалтмай. Мәҫәлән, кеше үҙенең буй-һынын матур тоторға тейешлеге тураһында бына нимә тигән ул: "Күпме ашағаныбыҙҙы күрер өсөн ҡорһаҡ менән күҙ кәүҙәнең бер яғында урынлашҡан". Ябығыу, диета тотоу, сәләмәт туҡланыу яңы быуат шауҡымы ғына түгел, тимәк. Уның хаҡында ана үткән йөҙ йыллыҡта ла актриса нисек аҡыллы әйткән. Шул уҡ ваҡытта оҙайлы ваҡыт асығып, үҙен ыҙалатып ябығырға тырышҡандарҙы ла өнәмәгән: "Ғүмер шул тиклем ҡыҫҡа, уны һаран иргә, диетаға һәм насар кәйефкә тәләфләргә түгел", - тигән әйтеме лә бар. Диетаға ҡағылышлы тағы: "Әгәр ҙә икмәк, тәмле-татлы, майлы ит ашамаһаң, балыҡ менән һыра эсмәһәң, бит ыҡсымланып, бәләкәсәйеп ҡала ла ул, әммә йөҙгә күңелһеҙ, ҡайғылы төҫ инә", - тигән.

"Кеше һиңә яуызлыҡ эшләһә, кәнфит бир. Тағы эшләһә, тағы кәнфит бир. Яуызлыҡ эшләгән һайын кәнфит һоғондор - диабетҡа юлыҡмаһа, һис юғында һимерер", ти Ф. Раневская. Халҡыбыҙҙа ла шундай әйтем бар ҙа баһа: таш менән атҡанға аш менән ат. Уның да мәғәнәһе, бәлки, саманан тыш ашатып, дошманыңды һимертеүҙер?

Фаина Раневская тапалған мәҡәлдәрҙе, аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәрен, фекерҙәрен ҡабатларға яратмаған, ә уларҙы үҙе уйлап сығарған. Бының өсөн махсус уйланып, эҙләнеп ултырмаған, әлбиттә. Үҙенең эске кисерештәре, күҙәтеүҙәре, тормош тәжрибәһе аша теге йәки был күренешкә үҙ баһаһын белдергән. Ҡайһы берҙә уның әйткәндәре киҫкенерәк, тупаҫыраҡ та яңғыраған. Шул сәбәпле, хеҙмәттәштәре, эргә-тирәһендәгеләр менән һыйышыуы еңел булмаған уға. Төртмә һүҙе, кинәйәһе менән кемделәр рәнйеткәнен һиҙенһә, шунда уҡ ғәфү үтенергә ашыҡҡан. Шуға ла уға оҙаҡ асыу һаҡлау, үс тотоусылар булмағандыр. Ҡасандыр актрисаның тәнҡит утында көйгәндәр ҙә хатта уның кәңәшенә мохтаж булып килә торған булған.

Фаина Раневскаяның үҙенә генә хас, ғәҙәти булмаған фекер йөрөтөүен белгәндәр йыш ҡына уға төрлө һорау бирергә яратҡан. Мәҫәлән, был тормошта нисек йәшәргә кәрәк , тигән һорауға, ул: "Әҙәм аҡтыҡтары ла һине иҫләрлек итеп", - тип яуап биргән. "Ҡара сәсле ҡатын-ҡыҙҙар иренә хыянат итмәйме, әллә һары сәслеләрме?" тигән һорауға: "Сал сәслеләр", - тип кинәйәләгән.

"Беҙҙең арала күңелендә Аллаһы Тәғәләне йөрөткәндәр бар. Бар Шайтанды һыйындырғандары. Ҡорт, бабаһыр йөрөткән әшәкеләр ҙә етерлек", тигән кинәйәһе артистың тормош ысынбарлығынан, атап әйткәндә, ғәйбәттән, нахаҡ һүҙҙәрҙән, аяҡ салырға, уңышынан көнләшеүселәрҙән һаҡланырға теләгәне күренә.

Ахмаҡ кешеләрҙән генә түгел, ә башҡаларҙан аҡыллыраҡ, юғарыраҡ булып күренергә тырышҡандарға арналған афоризмдары ла бик күп уның. "Мәғәнәһеҙ, алйот кешеләрҙән ҡурҡам. Айырыуса ҡатын-ҡыҙҙарҙан. Улар кимәленә төшмәйенсә, бер ҡасан да нисек һөйләшергә белмәйһең", тигән фразаһы бар. "Кешеләр шәм кеүек түбәндәгеләргә бүленә: йылылыҡ өсөн, яҡтылыҡ өсөн һәм бер урынға... ҡуйыр өсөн", тигән әйтеме бик уҫал әйтелгән, әлбиттә, әммә социаль селтәрҙәрҙә бик күп лайк йыйған. Башын йүләрлеккә һалып, үҙ эшен эшләгән, маҡсатына өлгәшкәндәргә ҡарата уҫал һүҙҙәре байтаҡ: "Шундай кешеләр була, хатта уларға мейеһеҙ йәшәүе ҡыйын түгелме тигән һорауҙы бирге килә". Тапҡыр һүҙҙәр оҫтаһы яңғыҙлыҡтан ахмаҡлыҡтан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡҡан. "Телефон булып та, өйҙә тик будильник тауышы ғына ишетелә", тигән кинәйәһе бик мәғәнәле. Артист бер тапҡыр ҙа тормошҡа сыҡмаған. Яҡлаусыһыҙ кешегә һәр төрлө баҫым да булғандыр. Уҫал кинәйәләре, әсе теле, тапҡыр әйтемдәре, бәлки, һаҡланыу реакцияһы ла булғандыр. Нисек кенә булмаһын, Фаина Раневская кино сәнғәтендә тыуҙырған образдары менән генә түгел, ә бөгөнгө быуында күберәк тап афоризмдары менән популяр.

Эйе, был донъяға килгән һәр кемде билдәле иткән ниндәй ҙә булһа сифаты була: кемдер йыры, икенселәр бейеүе, өсөнсөләр асышы, ҡаһарманлығы, һөнәрилеге менән дан ҡаҙана. Матурлығы, изге күңеле һәм эше менән иҫтә ҡалғандар бик күп. Яуызлыҡ, тар күңеллелек, һаранлыҡ һәм ике йөҙлөлөк менән яҡындарыбыҙ күңелендә ҡалырға яҙмаһын инде...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ШАҢДАУ*

# ДОНЪЯ КӨТӨҮ -

## бер-береңә хеҙмәт итеү



**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 47-се һанында баҫылып сыҡҡан "Мотлаҡ тигәне... ситлек була түгелме?" тигән мәҡәләне уҡығас, үҙемдең фекерҙәрем менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле.**

Мәҡәләләге кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙың һүҙҙәрен ҡабатлап тормайым, уның һөйләгәндәре үҙенең яңғыҙлығын аҡлау, һылтау ғыналыр, тип уйлайым. Әгәр ҡыҙҙар һылтау табып, кейәүгә сыҡмаһа, егеттәр кәләш алмаһа, балалар тыумаһа, кешелек донъяһы дауам итерме һуң? Юҡ! Чечен, осетин, дағстандарҙан үрнәк алырға кәрәк - тыуым буйынса был халыҡтар иң алдынғы урында килә. Ҡытайҙарҙан да фәһем алырға була: үҙ милләтенән башҡа халыҡ вәкилдәре менән ғаилә ҡормай улар. Әлбиттә, һәр кемдең үҙ аңы, үҙ көнө, ләкин тирә-йүнеңә лә күҙ һалып йәшәргә кәрәк. Кейәүгә сыҡмайым, тигән ҡыҙ: "Ир көйөн көйләп, ғүмер буйы уға хеҙмәтсе булып йәшәгем килмәй", - тип әйтә икән, был да уның ныҡлы инаныуы түгелдер. Һуң, ул бит әле ир менән йәшәп тә ҡарамаған, "хеҙмәтсе булыу"ҙы ҡайҙан белә? Бәлки, әсәһе шундай "хеҙмәтсе көнөндә" йәшәгәндер? Шулай булған хәлдә лә, уның ҡыҙын да тап шундай яҙмыш көтә, тип кем раҫлай ала? Унан һуң, ир менән йәшәү ниңә әле фәҡәт иргә хеҙмәт итеү тип аңлашыла? Минеңсә, "хеҙмәт итеү" ике яҡтан да барырға тейеш, йәғни матур итеп, бер-береңә ихтирам һаҡлап төҙөлгән ғаиләңә, дөйөм, уртаҡ бурыстарҙы үтәүгә, балаларыңдың киләсәге хаҡына, әйтәйек...

Бер кемгә лә яңылыҡ түгел: яңғыҙлыҡта ғүмер һөргән ҡатын-ҡыҙ, хатта әбейҙәренә тиклем, ниндәйҙер сәбәп менән яңғыҙ ҡалғанына үкенес белдерергә ярата. "Ирем булып, хатта эшләмәй генә өйҙә хужа булып ултырһа ла риза булыр инем" тип әйткәндәрен үҙем ишеткәнем бар. Ә һүҙ барған әлеге мәҡәләлә был ҡыҙҙың кәйефе башҡаларға, айырыуса йәш ҡыҙҙарға "Кейәүгә сыҡмағыҙ, бәхетһеҙ буласаҡһығыҙ" тигәнерәк антисоциаль реклама кеүек яңғырай.

Әлбиттә, кейәүгә сығып, яҡшы йәшәр өсөн үҙеңә яҡшы булырға тырышырға кәрәк, шул саҡта һин генә түгел, кейәүең дә һинең ғүмерлек "хеҙмәтсең" буласаҡ, һинең көйөңдө көйләйәсәк. Башҡорт халҡында тормош ҡороуға, балалар үҫтереүгә бер ваҡытта ла насар ҡараш, кире мөнәсәбәт булмаған. Киреһенсә, ҡыуанғандар ғына һәм йәштәргә күмәкләп ярҙам иткәндәр. Балалары тыуһа, шатланышып, "Һәр сабый үҙ ризығы менән тыуа", "Баланың балаһы балдан татлы" һәм башҡа шундай тапҡыр һүҙҙәр әйтеп, яңы тыуған балаға күп итеп ҡусты һәм һеңлеләр өҫтәлеүен теләгәндәр...

Тағы бер һүҙем бар әле. БСТ каналының "Тәмле" тапшырыуында ир-егеттең бешеренгәнен күрһәтәләр. Ирҙәрҙең дә бешеренә белеүе яҡшы, әлбиттә. Мәскәү тапшырыуҙарында ла юғары класлы ашнаҡсы-шефтарҙың ир заттарынан булыуына өйрәнеп бөттөк. Ләкин был миңә бер ҙә генә оҡшамай, йәмәғәт. Бигерәк тә башҡорт тәрбиәһендә бындай нәмә юҡ бит ул. Дөрөҫ, өйләнә алмай йөрөгән ир-егет атаәсәһенән башҡа торһа, сараһы юҡ - бешеренәлер ҙә. Ә бит тормошта ирҙәрҙең дә, ҡатын-ҡыҙҙың да үҙҙәренә тәғәйен эштәре етерлек. Әлбиттә, ҡайһы саҡ аш-һыу тирәһендә ҡатыныңа ярҙам кәрәк булғанда ғына алъяпҡыс бәйләп алырға була ул, тик оҙаҡҡа түгел! Ашты, бәлеш-торттарҙы ҡатының бешерһә генә тәмле бит, туғандар. Ә беҙҙең һөйөклө ҡатындарыбыҙҙы ҡыуандырырлыҡ башҡа эштәребеҙ булырға тейеш. Бер-береңә хеҙмәт итеп, донъя көтөү бына шулай була, тип уйлайым.

**Салауат ЙӘРМӨХӘМӘТОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

✔ *Ҡасай ауылында йәшәүсе типтәрҙәр үҙҙәренең аҫаба йәнәй башҡорттары булыуҙарын белдәләп, властарға хат яҙалар. Һүҙҙәрен ҡеүәтләү өсөн, Петр Алексеевичтың 1710 йылдағы указын һәм 1747 йылдағы иғланын ебәрәләр.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халкыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн




### Йәнәй башҡорттары йәшәгән ерҙәр

Йәнәй ырыуына ҡараған башҡорттар Ыҡ, Ағиҙел, Иж, Кама йылғаһының ике яҡ яры буйлап йәйелгән дала-урмандарҙа йәшәгән. Уларҙың аҫаба ерҙәре Вятка губернаһы Сарапул өйәҙенең көньяғында, Ағиҙел йылғаһының Кама йылғаһына ҡойған урынында, Өфө губернаһының Минзәлә һәм Бөрө өйәҙҙәре ҡушылған арала урынлашҡан була.

Тарихи Башҡортостан территорияһында кантонлыҡ системаһы булған осорҙа йәнәйҙәр 11-се башҡорт кантонының 24-се һәм 25-се йорттарына ҡарай (йортҡа бер нисә ауыл инә). XIX быуаттың 60-сы йылдарында крепостной хоҡуҡ бөтөрөлөү сәбәпле Рәсәйҙә ҙур үҙгәрештәр булып үтә, улар Башҡортостанға ла ҡағыла. Беренсенән, кантонлыҡ системаһы (1798-1865 йылдар) бөтөрөлә, икенсенән, элекке башҡорт атамалары урынына (Байлар, Бүләр, Гәрәй, Йәнәй, Ҡырғыҙ, Саралы-мин, Юрмый рәсми ҡулланылыштан сыға) тораҡ пункттары исеме менән аталған административ-территориаль улыстар булдырыла (Семиостровский, Аҡтаныш, Байсар, Нурҡай, һ.б). 1855-1863 йылдарҙа 12-се (элекке 11-се) кантон территорияһы, типтәрҙәрҙе башҡорт ғәскәренә ҡушыу сәбәпле, 4 кантонға бүленә.

Башҡорттар буйынса ҡабул ителгән 1863 йылдың 14 май положениеһына ярашлы, 28 кантон урынына 11 кантон тороп ҡала. Шулай уҡ уларға номерҙар бирелә, мәҫәлән, бынан һуң Сарапул һәм Елабуға өйәҙҙәренән торған 7-се Минзәлә кантоны, йәки Бөгөлмә һәм Быҙаулыҡ өйәҙҙәренән торған 8-се Боғораслан кантоны, тип йөрөтөлә башлай. Был 11 кантон 1865 йылда тарихи Башҡортостан территорияһында кантонлыҡ системаһы бөтөрөлгәнгә тиклем була. Һуңынан башҡорт ауылдары менән теге йәки был улысҡа, өйәҙгә, губернаға (Ырымбур, Өфө, Вятка, Һамар губерналары) ҡараған старшиналар идара итә.

Әлеге Татарстан Республикаһы территорияһында йәшәгән башҡорттарҙың ерҙәре тарихи карталарҙа ла урын тапҡан. Быны П.И. Кеппендың VIII ревизия нигеҙендә төҙөгән "Европа Рәсәйенең этнографик картаһы", А.Ф. Риттихтың 1875 йылда төҙөгән этнографик картаһында күрергә була. Минзәлә, Ыҡ, Кама йылғалары буйындағы далаларҙа йәшәгән башҡорттар башҡа карталарҙа ла, Ф.А. Фиельструп, С.И. Руденко, К.В. Лаврентьевтың хеҙмәттәрендә лә күрһәтелгән.

Йәнәй башҡорттары хаҡында һүҙ алып барғанда, К.В. Лаврентьевтың "Вятка губернаһының география-һы" хеҙмәтенә иғтибар итергә кәрәк (тәүге тапҡыр 1890 йылда нәшер ителә, һуңынан бер нисә тапҡыр ҡабаттан баҫып сығарыла). Был хеҙмәткә өҫтәмәлә 4 төҫ менән эшләнгән карта ла була, унда төбәктәге халыҡтарҙың йәшәгән ерҙәре күрһәтелә. Картанан крайҙа вотяктар (удмурттар), черемистар (мариҙар), башҡорттар, татарҙар, пермяктар, типтәрҙәр, һ.б халыҡтар йәшәүен, уларҙың ауылдарының һәм станцияларының атамаларын күрергә була. "Народоведение" бүлегендә һәр бер этнос хаҡында мәғлүмәт килтерелгән. Автор: "Вятка губернаһында күп кеше йәшәй. Халыҡ һаны буйынса был губерна Рус ерҙәренең бөтә губерналары араһында беренсе урынды алып тора, ике енесте лә алғанда 3,5 миллион тирәһе кеше иҫәпләнә... Күпселек халыҡ урыҫтарҙан тора, әммә уларҙан башҡа губернала башҡа милләттәр - вотяктар, черемистар, татарҙар, башҡорттар, пермяктар, бәсермәндәр йәшәй..." тип яҙа. Башҡорттар тураһында түбәндәге мәғлүмәтте бирә: "Башҡорттар Сарапул һәм Елабуға өйәҙҙәрендә генә йәшәй. Уларҙың һаны 12 мең. Ҡиәфәттәре һәм кейемдәре йәнәтенән башҡорттар татарҙарға оҡшаған, шулай уҡ мосолман динен тоталар".

Күреүебеҙсә, башҡорттар Вятка губернаһының көньяҡ өлөшөндә, Елабуға һәм Сарапул өйәҙҙәрендә йәшәгәндәр. Әгәр тәүгеһендә байлар һәм йәнәй ырыуҙары вәкилдәре булһа, икенсеһенең башҡорт халҡы тик йәнәйҙәрҙән генә тора. К.В Лаврентьевтың телгә алынған хеҙмәтендә Сарапул өйәҙе буйынса тулы мәғлүмәттәр бирелә. Мәҫәлән, "Халыҡ" бүлеге аша төньяҡ йәнәйҙәрҙең яҡынса һаны буйынса фекер йөрөтә алабыҙ (бөгөнгө көндә был Татарстан Республикаһының Ағырҙа районына ҡарай). Автор: "Сарапул өйәҙендә 350 мең кеше йәшәй. Был өйәҙ үҙенең төрлө милләттәр вәкилдәренән тороуы менән үҙенсәлекле. 250 мең булған урыҫтарҙан тыш, өйәҙҙә 82 мең вотяк, 6 мең татар, 5 мең башҡорт, 4 мең типтәр, 1 мең черемис... бар. Шулай уҡ дин яғынан да төрлөлөк күҙәтелә. 320 мең православие вәкиле, 13 мең расколсы ("раскольники"), 15 мең мосолман, 1 мең мәжүси... йәһүҙи һәм католиктар бар. Өйәҙҙә 1 мең квадрат саҡрымға 27 кеше тура килә". Шулай уҡ башҡорттар типтәрҙәр тигән этноҡатлам составында ла булыуын хәтерҙән сығарырға ярамай. Быны раҫлаған документтарҙың береһе булып, Девятерня һәм Нарат ауылдары типтәрҙәре үҙҙәренең был ҡатламға яңылыш индерелеүе, сығыштары менән башҡорттарҙан булыуы хаҡында яҙған хат тора. Бынан тыш, Ҡасай ауылында йәшәүсе типтәрҙәр үҙҙәренең аҫаба йәнәй башҡорттары булыуҙарын билдәләп, властарға хат яҙалар. Һүҙҙәрен ҡеүәтләү өсөн, типтәрҙәр рәтенә яңылыш индереүҙәрен раҫлаған Петр Алексеевичтың 1710 йылдағы указын һәм 1747 йылдағы иғландың күсермәһен ебәрәләр.

Шулай итеп,1834 йылда үткән VIII Бөтә Рәсәй халҡы ревизияһына ярашлы, Вятка губернаһының Сарапул һәм Елабуға өйәҙҙәрендә (бөгөнгө көндә Татарстандың Ағырҙа районында) 1200 йәнәй ырыуы башҡорто йәшәгән. XIX быуат аҙағы, XX быуат башында әйтелгән территорияла йәнәйҙәрҙең һаны биш тапҡырҙан күберәккә артып, 5500-6000 тирәһе тәшкил иткән. 1834 йылда Минзәлә өйәҙендә 6173 (Татарстандың Аҡтаныш һәм Минзәлә райондары), Бөрө һәм Бәләбәй өйәҙҙәрендә тағы ла 1100 тирәһе йәнәй башҡорто йәшәгән. Уларҙың һаны (1834 йылда) 8400 тирәһе булған. Дөйөм алғанда, XVIII быуатта, XIX быуаттың башында үткәрелгән ревизиялар, һуңынан үткәрелгән төрлө халыҡ иҫәбен алыу кампанияларынан күренеүенсә, XIX быуат, XX быуат башы башҡорттарҙың, шул иҫәптән йәнәйҙәрҙең артыуына ыңғай йоғонто яһаған осор була.

1920 йылда Сарапул өйәҙенең Ағырҙа һәм Иҫәнбай улустары ТАССР-ға бирелә. Елабуға өйәҙе 1921 йылда милли автономияларға бәйле сәбәпле ике өлөшкә бүленә: төньяғы Вотка автономиялы округына, көньяғы Татар АССР-ына бирелә. Татарстан Республикаһының Ағырҙа һәм Менделев райондары төҙөлә. Бөгөнгө көндә йәнәйҙәр нигеҙ һалған ауылдар Татарстандың төньяҡ-көнсығышында, Башҡортостан республикаһының төньяҡ-көнбайышында урынлашҡан.

Шулай итеп, XIX быуатҡа тиклем башҡорт халҡының эске төҙөлөшө, Евразияның бөйөк далаларында йәшәгән башҡа халыҡтарҙағы кеүек үк, күп баҫҡыслы була. Бер нисә тиҫтә ҙур һәм вағыраҡ ырыу, бер географик территорияла үҙҙәренең этник берҙәмлеген танып йәшәй. Үҙ сиратында һәр ырыу араларға, нәҫелдәргә, аймаҡтарға, илдәргә бүленә. Йәнәй этнонимының тарихы, яҙма сығанаҡтарға ҡарағанда, X быуатҡа ҡайтып ҡала. Улар Көньяҡ Урал башҡорттарының этногенезы процесына иң иртәнге этаптарҙан алып өлөш индерә. Шуны ла хәтерҙән сығарырға ярамай, йәнәй, юрматы, юрмый, ғәйнә атамалары тик башҡорт халҡына ғына хас күренеш, башҡа халыҡтарҙың ырыу номенклатураһында осрамайҙар. Шуға күрә лә ошо ырыуҙарға ҡарау автоматик рәүештә башҡорт этносынан булыуҙы раҫлай.

**Азамат САЛАУАТОВ**
**әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Ҡабартмалы ҡайыу кәм тигәндә беҙҙең эраға тиклем I мең йыллыҡтың уртаһынан алып билдәле. Уның менән һоҡланғыс Ҡытай туҡымалары һәм Таулы Алтай ҡурғандарында алып барылған ҡаҙыныу эштәре барышында табылған туҡымалар сигелеүен күрергә мөмкин. Шулай уҡ тамбур сигеүе менән Монголияның һун осорона ҡараған ҡурғандарҙа табылған туҡыма биҙәктәре сигелгән. Башҡорттарҙа был ысул менән серге-таштар, янсыҡтар, түшәк тасмаһындағы сигеүҙәр башҡарылған.

Был предметтарҙағы биҙәк контурҙары ысын тамбур ҡайыуы менән сигелһә, ә контурҙың эсе ҡыя сәнсемләп эшләнгән. Биҙәктәр барыһы ла төрлө төҫтәге йөн ептәр менән башҡарылған. (**һүрәт**).



Атап үтелгән әйберҙәрҙәге атап кителгән техника менән сигелгән биҙәк мотивтары сарыҡты биҙәгәндәге аппликация техникаһы менән өлөшләтә генә тап килә. Бында S хәрефе формаһындағы фигураны (**һүрәт**), уға өсмөйөштәр өҫтәүҙе индерергә була. Сатраш килгән фигура осонда был биҙәктең булыуы үҙенсәлекле орнамент барлыҡҡа килтерә. Улар уҡ ҡатмарлыраҡ композицияларҙың мөһим өлөшө булып тора һәм үҫемлек һүрәтләнгән орнаментты күҙ алдына баҫтыра. Икенсе фигура - X хәрефе формаһында





(**һүрәт**), ҡайһы берҙә уның өҫкө өлөшө генә төшөрөлә. Был фигура ябай һәм ҡатмарлы һүрәттәрҙә осрай. Элементтың артабанғы үҫешендә "ағас"тың шартлы һүрәте барлыҡҡа килә. Ҡайһы берҙә бында S формаһындағы фигура йәки сәскә ҡулланыла.

Атап үтелгән биҙәктәр сарыҡтағы кеүек үҙара бәйләнеп бер бөтөн композицияны тәшкил итмәй, ә предметтарҙы үҙ аллы биҙәй. Бер предметты биҙәгәндә улар серге-таштағы кеүек күпләп осраһа, уларҙы урынлаштырғанда симметрия ғына һаҡлана. Бигерәк тә һарауыстағы трапеция формаһындағы бороңғо сигеү өлгөләре иғтибарҙы айырым йәлеп итә. XX быуат башында һарауыс һаҡланған райондарҙа улар туй йолаларында ҙур роль уйнай.

✓ *Был барлыҡ дәүләттәрҙә лә ҡағиҙә булараҡ ҡабул ителгән. Закон һатыулашыу объекты түгел, ә үтәлергә, ҡанундарҙың, директив күрһәтмәләрҙең үтәлеше урындағы властар тарафынан тәьмин ителергә тейеш.*



# ТУҒАН ТЕЛ МӨХИТЕН йән йылыһын

**Күп ғалимдар туған телдә белем алыусы балаларҙың интеллектуаль үҫеше яҡшыраҡ булыуын билдәләй. Әле 1592-1670 йылдарҙа йәшәгән һәм үҙенең педагогик эшмәкәрлеген мәғариф, тәрбиә проблемаларына арнаған чех аҡыл эйәһе-гуманист Ян Амос Коменский шундай һығымта яһаған. Ул туған тел нигеҙендә киң белем биреүгә, һуңынан ғына сит телдәрҙе өйрәнеүгә саҡырған. Швеция һәм Венгрияның мәғариф реформаһын тап ул тормошҡа ашырған. Бөгөнгө заман ғалимдары ла, бала 1 йәштән 8 йәшкә тиклем тормош өсөн мөһим мәғлүмәттең һәм белемдең 80 процентын үҙләштереп өлгөрә, мәктәптә бары тик - 10, икенсе уҡыу йортонда 5 процентын ғына туплай, ә ҡалған 5 процентты ғүмер буйы йыя, тип белдерә. Әгәр бала өйҙә башҡортса һөйләшеп, балалар баҡсаһында рус төркөмөндә йөрөп, мәктәптә русса белем алһа, ул үҙенә тәғәйен 80 процент мәғлүмәтте туплауҙан мәхрүм ҡаласаҡ. Ошо хәҡиҡәтте аңлау кимәле ниндәй бөгөн? Йәғни, республикаға исем биргән милләттең туған теленең бөгөнгөһө һәм киләсәге ниндәй? Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышы тап ошо сетерекле мәсьәләгә бағышланды ла инде. Уның эшендә Башҡарма комитет ағзалары, БР Президенты Аппараты, БР Хөкүмәте, БР Мәғариф министрлығы, мәғарифҡа ҡағылышлы башҡа ведомстволар вәкилдәре, район хакимиәттәре башлыҡтары урынбаҫарҙары һәм мәғариф бүлексәләре вәкилдәре, район-ҡала башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәре ҡатнашты.**

**Рәсәй Федерацияһында һан яғынан 4-се урында торған башҡорт халҡының туған теленең киләсәген ЮНЕСКО эксперттары "хәүеф аҫтында" тип билдәләй. Уның бөтөнләй юғалыуына юл ҡуймау маҡсатынан Башҡарма комитеттың Мәғариф һәм фән буйынса комиссияһы ағзалары, эшсе төркөмдәр Мәғариф министрлығы, урындағы хакимиәт башлыҡтары менән берлектә район һәм ҡала мәктәптәренең, балалар баҡсаларының эштәре менән танышты. Барлығы 19 район һәм ҡалала 50-нән артыҡ мәктәп һәм балалар баҡсаһы тикшерелгән. Был хаҡта төп сығышта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Күсәбаев ентекле туҡталды. Артабан беҙ гәзит уҡыусылар иғтибарына тикшереү материалдарын үҙ эсенә алған ошо сығыштың иң мөһим урындарын еткерәбеҙ.**

## Өлгәшкән уңыштары етерлек

Күп мәктәптәрҙә, мәғариф өлкәһендәге туҡтауһыҙ барған реформаларға бирешмәйенсә, балаларға сифатлы белем бирергә тырышалар, - тип башлап китте докладсы һүҙен. - Быны Берҙәм дәүләт имтихандарының һөҙөмтәләре лә раҫлай. Бигерәк тә башҡорт лицей-гимназияларының эшен айырым билдәләп үтергә кәрәк. Уларҙа белем биреү сифаты күрһәткестәре 55-80 процент, БДИ һөҙөмтәләре республика күрһәткестәренән юғарыраҡ. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы 2-се лицей-интернат математиканан БДИ һөҙөмтәләре буйынса республикала 5-се урын биләй. Юғары уҡыу йорттарына инеү проценттары ла юғары, йыл һайын 85-100 процент сығарылыш класс уҡыусылары төрлө вуздарҙың студенттары булып китә. Башҡорт милли гимназия һәм лицейҙары уҡыусылары республика, муниципаль кимәлдә уҙғарылған олимпиада һәм конкурстарҙа әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ ҡалаһы 3-сө башҡорт лицей-интернаты уҡыусылары республика кимәлендәге олимпиадаларҙа еңеп, Бөтөн Рәсәй кимәлендәге олимпидаларҙа сығыш яһай, призлы урындарға лайыҡ була. Афарин! Барлыҡ башҡорт лицей-гимназияларын да ошо кимәлгә күтәреү йүнәлешендәге эшмәкәрлекте дауам итергә кәрәк. Шулай итеп, бынан 20 йылдар самаһы элек Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Мәғариф министрлығы һәм йәмәғәтселек инициативаһы буйынса булдырылған башҡорт лицей-гимназиялары үҙҙәренең төп - милли кадрҙар әҙерләү бурысын әлегә үтәй, тип һығымта яһарға мөмкин.

Күп кенә мәктәптәр сифатлы белем биреп кенә ҡалмай, балаларҙы төрлө яҡлап үҫтерергә лә тырыша. Мәҫәлән, Йылайыр районының Йомағужа, Салауат районының Лағыр урта мәктәптәре, оптималләштереүгә бәйле бөтә түңәрәктәрҙең дә сәғәттәре киҫелеп, алынып бөткәс, түләүһеҙ түңәрәк эштәре алып барырға ҡарар иткән. Милли үҙаңды формалаштырыу, патриотик һәм рухи тәрбиә биреү буйынса маҡсатлы эш алып барған мәктәптәр бар (Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты, Баймаҡ лицей-интернаты, Өфө ҡалаһының 20-се, 158-се гимназиялары, 136-сы лицейы, Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернаты, Мәләүез ҡалаһының Кинйә Арыҫланов исемендәге Башҡорт гимназияһы). Әммә беҙҙең тикшереүҙәр барышында милли мәктәптәрҙең белем биреүҙәге, тәрбиә эшендәге барлыҡ ыңғай ҡаҙаныштарының юҡҡа сығыу ҡурҡынысы алдында торғанын күрҙек...

## "Әлифба" ғына башҡортса...

Был хәлдең сәбәбе - балаларҙы туған телдә уҡыуҙан мәхрүм итеү. Тикшереү барышында башҡорт ауылдары мәктәптәрендә башланғыс класс балаларын төп предметтар - математика, "Тирә-яҡ мөхит", хатта музыка дәрестәрен дә рус телендә уҡытыуҙары менән осраштыҡ. Беренсе класта тик "Әлифба" ғына башҡортса уҡытыла. Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, милли-төбәк компоненты һәр уҡыу предметының йөкмәткеһендә сағылыш табырға тейеш булып та, был үтәлмәй икәнен дә аңланыҡ. 5-се кластан уҡытыла башлаған тарих, география фәндәре тураһында әйтеп тораһы ла түгел - дәрестәр рус телендә алып барыла. Беҙ тикшергән белем усаҡтарының барыһы ла ҡағыҙҙа башҡорт телендә белем биреүсе мәктәптәр иҫәбендә йөрөй. Сәбәбе ябай: башҡорт теле 5 сәғәтлек программа нигеҙендә өйрәнелһә - отчетта башҡорт мәктәбе итеп күрһәтелә, 3 сәғәтлек программа буйынса уҡытылһа - рус телендә белем биреүсе мәктәп иҫәпләнә. Уҡытыусыларға: "Ни өсөн беренсе кластан башҡорт балаларына математиканы русса уҡытаһығыҙ?"- тигән һорау бирәбеҙ. "БДИ-ға әҙерләйбеҙ", тигән яуап алабыҙ. "Ә "Тирә-яҡ мөхит" дәресе ни өсөн беренсе кластан русса уҡытыла?" - тигәнгә: "Сөнки Мәғариф министрлығынан контроль-тикшереү материалдары рус телендә килә", - тип яуаплайҙар.

Ҡайһы бер район үҙәктәрендә бөгөн бер генә башҡорт мәктәбе лә, хатта башҡорт кластары ла юҡ. Башҡорт балаларының туған телендә белем алыу хоҡуғын сикләүсе бындай райондар иҫәбенә Архангел, Иглин, Миәкә, Федоровка һ.б. индерергә мөмкин. Күмертау ҡалаһының бер нисә мәктәбендә башҡорт теле башланғыс кластарҙа туған тел булараҡ түгел, хатта дәүләт теле булараҡ та уҡытылмай (Туған башҡорт телендә уҡытыу тураһында һүҙ барғанда әҙәби телдә һөйләшкән башҡорттар йәшәгән райондарҙы ғына түгел, төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкән көнбайыш райондарын да күҙ уңында тотабыҙ).

"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Законға ярашлы, барлыҡ субъекттарҙа ла балаларҙың туған телендә уҡырға хоҡуғы бар. Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан туған телдә белем биреүсе мәктәптәр өсөн махсус уҡыу планы эшләнгән. Шулай уҡ туған телдәрҙе предмет булараҡ уҡытырға теләгән мәктәптәр өсөн дә уҡыу планы бар. Мәғариф органдарына, мәктәп директорҙарына тик ата-әсәләр менән эшләп, ошо мөмкинлекте киң файҙаланырға, туған телдә уҡытыуҙың ыңғай яҡтарын аңлатырға ғына ҡала. Ата-әсәләрҙең күбеһе, эйе, балаларын яҡшы уҡыу йорттарында, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта уҡытырға теләй. Ләкин, белеүебеҙсә, бөгөн Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта күберәк шул уҡ милли мәғариф учреждениелары, мәҫәлән, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын, Башҡорт республика лицей-интернатын, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһын, башҡа башҡорт гимназия-лицейҙарын тамамлаусылар уҡый бит. Өфө ҡалаһында иң тәүге башҡорт мәктәбе булараҡ асылған 20-се гимназияла бөгөн башланғыс кластарҙа бөтә предметтарҙы ла башҡорт телендә уҡыталар. Кластан тыш саралар ҙа саф башҡорт телендә үтә. Ошо тәжрибәне башҡа башҡорт лицей-гимназияларына еңел генә таратып булыр ине. Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары хакимиәттәре тарафынан мәктәптәрҙе билдәле территорияларға беркетеү тураһында ҡабул ителгән документҡа ярашлы, башҡорт милли уҡыу йорто булараҡ асылған гимназиялар үҙенең микрорайонындағы бөтә балаларҙы ла уҡырға ҡабул итергә мәжбүр. Һөҙөмтәлә, Өфө ҡалаһының 140-сы, 102-се, 158-се, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 3-сө башҡорт гимназияларының милли составын алып ҡараһаҡ, унда бөтә уҡыусыларҙың 50-60 проценты ғына башҡорт, ҡалғандары - урыҫтар, башҡа милләт балалары. Шул арҡала башҡорт теленән башҡа бөтә предметтар ҙа рус телендә алып барыла һәм шулай уҡ кластан тыш саралар ҙа рус теленә күсеп бөтөп бара...

***Ҡайһы бер район үҙәктәрендә бөгөн бер генә башҡорт мәктәбе лә, хатта башҡорт кластары ла юҡ. Башҡорт балаларының туған телендә белем алыу хоҡуғын сикләүсе бындай райондар иҫәбенә Архангел, Иглин, Миәкә, Федоровка һ.б. индерергә мөмкин. Күмертау ҡалаһының бер нисә мәктәбендә башҡорт теле башланғыс кластарҙа туған тел булараҡ түгел, хатта дәүләт теле булараҡ та уҡытылмай. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Законға ярашлы, барлыҡ субъекттарҙа ла балаларҙың туған телендә уҡырға хоҡуғы бар. Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан туған телдә белем биреүсе мәктәптәр өсөн махсус уҡыу планы эшләнгән.***

## Закон үтәлергә тейеш!

Башҡорт милләтле булмаған балалар араһында башҡорт телен өйрәнеүгә кире ҡараш юҡ икәнен дә күрҙек. Уларҙың күбеһе, киреһенсә, башҡорт телен теләп өйрәнә. Ә инде дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеүҙе уҡытыу процесына индереүгә ҡәнәғәтһеҙлек тыуыуы сәбәбен беҙ ата-әсәләрҙең һәм педагогик йәмәғәтселектең ошо актты ҡабул итеүгә әҙер булмауында күрәбеҙ. Педагогик коллективтар башҡорт теле дәрестәрен индергәндә уҡыусылар менән дә, уларҙың ата-әсәләре менән дә аңлатыу эштәре алып бара алмаған. Ә бит уларҙың ҡулында закон бар: Башҡортостан Республикаһында башҡорт теле дәүләт теле булып тора һәм ул барлыҡ белем биреү учреждениеларында ла өйрәнелергә тейеш. Был барлыҡ дәүләттәрҙә лә ҡағиҙә булараҡ ҡабул ителгән. Закон һатыулашыу объекты түгел, ә үтәлергә, ҡанундарҙың, директив күрһәтмәләрҙең үтәлеше урындағы властар тарафынан тәьмин ителергә тейеш. Әммә, үкенескә күрә, был эш тормошҡа ашырылмай. В. В. Путин 2012 йылдың 23 ғинуарында "Независимая газета"ла донъя күргән мәҡәләһендә: "Рус "милли" моноэтник дәүләтен төҙөүҙе алға ҡуйырға тырышыуҙар беҙҙең мең йыллыҡ тарихыбыҙға ҡаршы килә. Ул ғына ла түгел, ул рус халҡын һәм рус дәүләтселеген тарҡатыуға иң ҡыҫҡа юл", - тип белдерҙе. Ил башлығының ошо юҫыҡта әйткәндәре ҡолаҡҡа эленмәүе ҡыҙғаныс...

Яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын төҙөүселәрҙең береһе Кондаков, бөтөн

✓ *Ни өсөн Татарстандың Мәғариф һәм фән министрлығы 35 дәреслеген дә был исемлеккә индереүгә өлгәшкән, ә беҙҙең бер дәреслек тә исемлеккә эләкмәгән? БР Мәғариф министрлығынан был һорауҙарға яуаптар көтәбеҙ.*



*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЮҒАЛТЫҠ, юғалтасаҡбыҙ

уҡыу предметтарының йөкмәткеһенә лә төбәк компонентын индереү ҡаралған, башланғыс кластарҙа ул 80:20 нисбәтендә, урта звенола 70:30 нисбәтендә, ти. Ләкин был талап бөгөн мәктәптәрҙә үтәлмәй. "Тирә-яҡ мөхит" предметының уҡытыусылар өсөн төҙөлгән эш программаһының күбеһендә, мәҫәлән, төбәк компоненты бөтөнләй юҡлығы асыҡланды. Ошо уҡ хәл башҡа предметтар буйынса дәреслектәргә лә ҡағыла. Мәҫәлән, Яңы стандарттар буйынса уҡығандар быйыл сентябрҙән бишенсе класҡа барасаҡ, уларға тарих дәрестәре инә башлаясаҡ, ә төбәк компоненты буйынса дәреслек-әсбаптар юҡ. Уны кем эшләйәсәк, ул ҡасан баҫылып сығасаҡ? Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән Яңы стандарттарға ярашлы дәреслектәр эшләнәме, улар ҡасан дөйөм Федераль исемлеккә индереләсәк? Ни өсөн Татарстан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы 35 дәреслеген дә был исемлеккә индереүгә өлгәшкән, ә беҙҙең бер дәреслек тә исемлеккә эләкмәгән? БР Мәғариф министрлығынан был һорауҙарға яуаптар көтәбеҙ. Министрлыҡҡа Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығы сығарған дәреслектәрҙе башҡорт теленә тәржемә итеү мәсьәләһен дә тиҙләтергә кәрәк (Тәржемәләрҙең сифаты буйынса ла һорауҙар күп. Башланғыс кластар өсөн тәржемә ителгән математика китабына, мәҫәлән, дәғүәләр күплеге тураһында ишеттек).

## Кадрҙар мәсьәләһе лә мөһим…

Тағы бер мөһим мәсьәлә - ул кадрҙар. Тикшереүҙәр барышында урындарҙа башланғыс кластарҙа башҡорт телендә белем бирә алырлыҡ белгестәр юҡлығы иң төп проблемаларҙың береһе булараҡ күтәрелде. Урта махсус белем биреү стандарттары индереләнгәс тиклем педколледждарҙа башҡорт бүлектәре бар ине. Стандарттар индерелеү менән улар бөтөрөлдө. Ә бөгөн мәктәптәрҙә башҡортса уҡытырға һәләтле башланғыс класс уҡытыусылары ҡытлыҡҡа әйләнеп бара. Бынан 10-15 йыл элек Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында башҡорт телендә уҡытырға һәләтле тарих уҡытыусылары әҙерләү маҡсатында махсус төркөмдәр асылғайны. Аҡса юҡлыҡҡа һылтанып, был төркөмдәр ҙа ябылды. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында күберәк башҡорт мәктәптәрен тамамлаған уҡыусылар уҡый. Был институт базаһында уҡыу предметтарын башҡортса уҡытырға һәләтле белгестәр әҙерләү проблемаһын еңел генә хәл итеп булыр ине.

## Ғилемебеҙ юҡҡа сыға…

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, "Тормош һабаҡтары" китабы авторы:** Мин туған тел уҡытыуҙы тәбиғәт ҡанундарына бәйләмәксемен. Беҙ, беренсенән, әсә телдәрен уҡытмау юлына баҫып, тәбиғәттән бирелгән бик күп хазинаны юғалтабыҙ. Тәбиғәт беҙгә иҫ киткес мөғжизә бүләк иткән, ул - моң. Һәм кеше моң нигеҙендә үҙенең нервы күҙәнәктәрен яйға һалып, сәләмәтлеген нығыта ала. Ә беҙ балаларҙы беренсе кластан ошо моңдан ғына түгел, бик күп нәмәнән мәхрүм итәбеҙ. Ата-әсәйҙәр өйҙә балаларына туған моңдарҙы тыңлатмай икән, тимәк, гәзиздәрен үҙ-үҙен дауалау сараһынан мәхрүм итә. Икенсенән, йән йылыны тигән нәмә бар. Инкубаторҙы күҙ алдына килтерһәк, ул тән йылыһы бирә ала һәм йомортҡанан себеш сыға. Себеш үҫә, тауыҡ була, әммә ул инде йомортҡа баҫа алмай. Сөнки ул себеш булып сыҡҡан ваҡытында йән йылыһы алмаған. Бына ошо йән йылыһының юғалғанлығын "Шәжәрә байрамы" асыҡ күрһәтә. Өлкәндәр шәжәрәһе янына килә, күрешәләр, ҡосаҡлашалар, илашалар, туғанлыҡтарын асыҡлайҙар. Ситтәрҙә ҡиммәтле машиналарҙан килеп төшкән, ҡулдарына кока-кола тотҡан йәштәр тора. Уларҙың бер нәмәлә эше юҡ: үҙ-ара һөйләшеү ҙә, туғанлыҡтарын эҙләү ҙә, ҡосаҡлашыу ҙа. Йәғни, уларҙың йән йылыһы юҡ. Беҙ туған тел мөхитен юғалтһаҡ, йән йылыһын юғалтасаҡбыҙ. Әлбиттә, закон бар, стандарттар бар, әммә бынан тыш тәбиғәт ҡанундары ла бар бит әле.

Мәктәптәрҙә уҡытыу башҡортса алып барылған ваҡытта уларҙа күпме талантлар, ғалимдар тәрбиәләнде. Бөгөн башҡорт телендә һөйләшкән төрлө тармаҡ ғалимдарына ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Шуға ла башҡорт ғилеменә ҡағылған күп өлкәләр тикшерелмәй. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡ медицинаһы тәжрибәһе иҫ китмәле, һәм ул әлегәсә өйрәнелмәгән. Ата-бабаларыбыҙ астрономияны яҡшы белгән - беҙҙең кемебеҙ ошо ғилем менән ҡыҙыҡһынғаны бар әле? Бөгөн бөтөн донъя ҡымыҙ эсә, бал ашай, ә бит тикшереләһе башҡорт ризыҡтары улар ғына түгел - ҡорот, ҡыҙыл эремсек, ҡубекмай, йылҡы ите үҙендә күпме асылмаған сер һаҡлай. Медицина институтында эшләгән бер профессорға: "Ниңә башҡорт аштарын тикшермәйһегеҙ, ниңә халыҡ дауалау ысулдарын фән юғарылығына күтәрмәйһегеҙ?" - тигәйнем, ул: "Мин бит, апай, русса уҡыным, башҡорт донъяһы менән бигүк таныш түгелмен", - тип яуапланы. Балаларыбыҙҙы русса уҡытып, беҙ башҡорттоң донъя кимәлендә күрһәтә торған башҡорт ғилемен юҡҡа сығарабыҙ шулай...

## Һаман күҙ буяйбыҙ!

**Фәнзил САНЪЯРОВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Мәғариф һәм фән буйынса комиссияһы рәйесе:** Күптән түгел Татарстан Республикаһына барып ҡайттым. Уларҙа ла туған татар телен уҡытыу буйынса проблемалар бар, әммә был проблеманы хәл итеүгә бөтә булған ресурстарҙы йәлеп иткәндәр һәм еҢ һыҙғанып эшләйҙәр. Хөкүмәт туған һәм татар телен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу өсөн йылына 390 миллион һум аҡса бүлә (Башҡортостанда был күрһәткес тиҫтәләгән тапҡырға аҙыраҡ). Республикала татар телен өйрәнеү фән кимәленә ҡуйылған. Беҙ Милли мәғариф проблемалары институты филиалын яптыҡ, күршеләр уны һаҡлап ҡалған. Иң мөһиме, уларҙы Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы үҙе финанслай. Ниңә беҙгә лә ошо Милли мәғариф институты филиалын яңынан тергеҙеү сараһын күрмәҫкә?

Татарстандың Мәғариф һәм фән министрлығында 3 бүлектән торған милли мәғариф идаралығы бар, унда 12 кеше эшләй. Айырым бер бүлек дәреслектәр әҙерләү һәм баҫып сығарыу менән шөғөлләнә. Ә беҙҙә бөтә милли мәғариф мәсьәләләре Мәғариф министрлығының 5 кешелек бер бүлегенә йөкмәтелгән. Унда ниндәй генә шәп белгестәр ултырһа ла, улар көнө-төнө ҡуна ятып эшләһәләр ҙә, милли мәғариф проблемаларының осона сыға алмаясаҡ. Татарстандан айырмалы, беҙҙә 14 туған тел өйрәнелә, уларҙың һәр береһенең үҙ проблемаһы етерлек, шулай уҡ башҡорт милли мәғарифына бәйле хәл ителмәгән мәсьәләләр тулып ята.

Татарстанда татар телендә уҡыусылар һәм өйрәнеүселәр күрһәткесе - 87 процент. Беҙҙә ул һан күршеләрҙекенән күберәк түгел икәнен беләбеҙ. Әммә Башҡортостанда башҡорт телендә уҡыусылар һәм өйрәнеүселәр һаны 98 процент тип күҙ буяйбыҙ. Үҙ-үҙебеҙҙе алдауҙан туҡтайыҡ инде! Милли мәғариф өлкәһендә ниндәйҙер һынылыш булырға тейеш. Бының өсөн 2015 йылда Мәғариф буйынса республика август кәңәшмәһен милли мәғариф торошона бағышларға кәрәк, тип тәҡдим итәм.

## Дәреслектәрҙә лә хикмәт бар

**Нажиә БИКБОВА, Сибай ҡалаһы "Ирәндек" лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы:** Мин һәр ваҡыт өс һорауға яуап эҙләнем:

- Ни өсөн үтә лә бай телебеҙ була тороп, телмәребеҙ иҫ киткес ярлы һәм хисһеҙ?
- Туған телебеҙ һаҡлауға мохтажмы, әллә яҡлауғамы?
- Ни өсөн интернетта төрлө милләт халҡы башҡорт телен уҡытыуға кире ҡараш белдерә? Был нилектән тыуа?

Беренсенән, телмәребеҙҙең ярлы, хисһеҙ булыуын дәлилләү өсөн төрлө саралар мәлендә сәхнәләрҙән сығыш яһаусыларҙы, радиоға, телевидениеға интервью биреүсе милләттәштәребеҙҙе тыңлау ҙа етәләр. Былар республикабыҙҙа башҡорт теле уҡытыуҙың концепцияһы тураһында һөйләй ҙә инде. Башҡорт кластарында дәрестә килештәрҙе өйрәтеп, эйә-хәбәр аҫтына һыҙып ултырыуҙы мөһимерәк һанаған дәреслектәрҙең кәрәге бөткәндер, минеңсә. Һүҙ төркөмдәрен таптырып, уҡыусыны фәнгә алып инергә маташыуҙың һөҙөмтәһе шул: мәктәпте тамамлағанда бала ике һүҙҙе бергә ҡушып һөйләй белмәй. Бына был беҙҙең система.

Минең фекеремсә, беренсе кластан һигеҙенсе класҡа тиклем грамоталы яҙырға өйрәтергә һәм, һис шикһеҙ, һүҙ байлығын арттырыу өҫтөндә эшләү мотлаҡ, сөнки юғарыла әйтеп үтелгән етешһеҙлектәрҙең бөтәһе лә һүҙ байлығының етешмәүенән килә. Ә морфологияны, синтаксисты өйрәтеүҙе 9 - 11-се кластарға ҡалдырһаҡ, бала үҙ фекерен әйтер өсөн һүҙлек запасын туплай алыр, бәхәскә кергәндә лә кәрәкле һүҙҙәр менән үҙенең ҡарашын аңлата алыр һәм, минеңсә, юғары кластарҙа башҡорт кластарын рус кластарына ҡушыу мәсьәләһе лә үҙенән-үҙе юҡҡа сығыр ине.

Икенсенән, Рәсәйҙә рус, татар һәм чечен телдәре генә һаҡланып ҡалған, тимәк, улар яҡлауһыҙ ҙа йәшәй ала. Беҙҙең башҡорт теле Хөкүмәт тарафынан да яҡланып, уҡытыусыға ижади эшләрлек шарттар, альтернатив дәреслектәр булмаһа, Мәғариф министрлығы үҙ эшен башҡорт теле уҡытыусыларын тикшереүҙә генә күреп, уларға реаль ярҙам күрһәтмәһә, телебеҙҙе һаҡлап ҡала алмаҫбыҙҙыр. Минеңсә, был һөйләшеүҙең дауамы Министрлыҡ кимәлендә лә булырға тейештер.

Өсөнсөнән, республикабыҙҙа төрлө милләт балаларын башҡорт теленә өйрәтеү мәсьәләһе ваҡытлы һәм урынлы күтәрелһә лә, уны уйлап еткермәйенсә тормошҡа ашыра башлау етди ҡаршылыҡтарға юлыҡтырҙы. Ғәҙәттәгесә, башҡорт теле уҡытыусылары был юлы ла экспериментҡа дусар ителде: концепция юҡ, программа юҡ, дәреслектәр юҡ, тик, эшләгеҙ, тигән бойороҡ ҡына бар. Ошо шарттарҙа башҡорт теле уҡытыусыһы рус балаларына башҡорт телен өйрәтергә мәжбүр булды. Аҙаҡтан баҫылған дәреслектәрҙең дә концепцияһы дөрөҫ түгел: рус милләтенең дә, халҡыбыҙҙың да телмәр үҙенсәлектәре иҫәпкә алынмаған. Теге йәки был яҙыусының ошо әҫәрен белмәһәгеҙ, башҡорт телен дә белмәйәсәкһегеҙ, тигән принципҡа таянып төҙөлгән булып сыҡты ул, һөҙөмтәлә белем дә юҡ, ихтирам да юҡ, тик интернетта телебеҙгә ҡаршы ҡотҡо һүҙҙәр генә бар.

Үҙем, ата-әсәләр башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы, тигән һүҙҙе ҡабул итә алмайым. Минеңсә, улар етлекмәгән программаға, дәреслектәргә генә ҡаршы. Үҙем ун туғыҙ йыл ошо категориялағы уҡыусылар менән эшләү дәүерендә ата-әсәләрҙән башҡорт теле тураһында бер генә лә насар һүҙ ишетмәнем, киреһенсә, ихтирам, ярҙамдарын тойоп эшләнем. Күрәһең, бының сәбәбе үҙ методикам булыуында һәм үҙ ҡулдарым менән әҙерләгән әсбаптар, һәр дәрес өсөн генә түгел, һәр уҡыусым өсөн дә етерлек материалдарҙы үҙем компьютерҙа баҫып, шуның өсөндә системалы эшләүемдә булғандыр. Әйткәндәй, ата-әсәләрҙең һорауы буйынса Хәйбулла районының Целинный ауылында башлап ебәргән был эшемдең һөҙөмтәһе 1-2-се синыфтар өсөн яҙылған дәреслектәрҙә авторҙаш булараҡ сағылыш тапһа, быйыл В.И. Хажин, Р.С. Зәйнитдинова, Ә.Р. Исрафилова менән бергәләп яҙылған ошо категориялағы уҡыусылар өсөн ҡулланмабыҙ баҫылып сыҡты. Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға сығарылған был ҡулланма ни бары йөҙ дана ғына, хәҙерге көндә эшебеҙ үҙ бағыусыһын көтөп ята...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ултырышта БР мәғариф министры Әлфис Суфиян улы Ғаязов та ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Әлбиттә, Башҡарма комитеттың тикшереү мәғлүмәттәре буйынса ниндәйҙер аңлатмалар бирергә әҙер түгел ине Әлфис Суфиян улы, шуға ла ул министрлыҡтың милли мәғариф өлкәһендәге ҡайһы бер эштәрен барлап сығыу менән генә сикләнде. Ә был өлкәләге ҡайһы бер күрһәткестәрҙең түбәнәйеүен, төбәк компоненты сәғәттәренең һаҡланмауын һәм уның кәмеүен, башҡа етешһеҙлектәрҙе яңы Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына, шуға ярашлы атҡарылған сараларға япһарҙы. Был документтың мөһимлеген берәү ҙә инҡар итмәй. Ләкин "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында", "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы закондар ҙа бит әле. Улар ҙа үтәлергә тейештер бит! Был закондарға ярашлы, милли мәғариф проблемалары, шул иҫәптән республикаға исем биргән халыҡтың телен йәки икенсе дәүләт телен өйрәнеү ҙә урындағы закондар нигеҙендә көйләнергә тейеш. Был эште иң тәүҙә Мәғариф министрлығы күтәреп сығырға тейеш түгелме ни? Ғөмүмән, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышында күтәрелгән мәсьәләләр бик күп һорауҙар тыуҙырҙы һәм уларҙың барыһы ла БР Мәғариф министрлығы адресына төбәлде. Тик ул һорауҙарға эшлекле, төплө яуап алынырмы икән?..**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

## БАТША ҠЫҘЫ ҺӘМ КЕЙӘҮЕ

Герда ял итергә ултырғас, ҡар өҫтөндә ҡоҙғонды күреп ҡала. Аптырағас, ошо ҡошҡа хәлдәрен һөйләп бирә. Ҡоҙғон ауырлыҡ менән кеше телендә уға Кайҙың ҡайҙа икәнлеген аңлата.

- Беҙҙең илдә бик аҡыллы батша ҡыҙы бар. Ул үҙенә кейәү эҙләй. Тик егет бик сибәр ҙә, аҡыллы ла, йор телле лә булырға тейеш икән. Гәзиттәрҙә ошо хаҡта иғлан биргәс, егеттәр көтөүе менән батша һарайына ябырылды, тик һәр береһе һарайға инеү менән ҡаушауҙарынан телен йота ла ҡуя икән. Өсөнсө көнөнә бер ябай ғына малай килә. Бер ҙә ҡаушап ҡалмай, батша ҡыҙы янына үтә лә, һоратырға түгел, бары тик аҡыллы ҡыҙ менән һөйләшеп ултырырға ғына килгәнен әйтә. Шунан бирле малай һарайҙа.

- Әлбиттә, был Кай, - тип ҡысҡырып ебәрә Герда. - Ул шундай аҡыллы, телдән һанай, кәсерҙәрҙе белә ине! Мине һарайға алып бар әле.

Ҡоҙғон уны һарайға алып бара. Герда шым ғына батша ҡыҙы бүлмәһенә инә, тик егет Кай булмай сыға.

Тегеләр ҡыҙҙы күреп ҡалалар һәм уның илай-илай һөйләгәнен тыңлағас, асыуланмайҙар. Ҡоҙғонға иһә һарай ихатаһында йәшәргә рөхсәт итәләр.

Егет хатта ҡыҙға йоҡларға үҙенең урынын бирә. Иртәгәһен Герданы баштан-аяҡ ебәккә лә бәрхәткә кейендереп, үҙҙәрендә йәшәргә тәҡдим итәләр. Тик ҡыҙ риза булмай. Уны атҡа егелгән каретаға ултырталар, кәрзин-кәрзин емеш, тәм-том тултыралар, оҙатып барырға ҡупшы кейенгән ылаусылар бирәләр.

Илашып хушлашалар. Ҡоҙғон күпмелер ваҡыт уларҙы оҙатып бара.

## КЕСКӘЙ ЮЛБАҪАР ҠЫҘ

Ҡараңғы урманда китеп барғанда күҙ сағылырлыҡ алтын каретаны күреп, уларға юлбаҫарҙар һөжүм итә. Араларында бәләкәс ҡыҙын йөкләп алған ҡатын да була. Герданы каретанан һөйрәп төшөрөп, үлтерергә йыйынғанда ғына кескәй генә булһа ла уҫал, еңмеш ҡыҙыҡай әсәһенең ҡолағын тешләй ҙә ала:

- Ул минең менән уйнаһын, кейемдәрен миңә бирһен, минең менән бергә йоҡлаһын, - тип шарылдай. - Каретаны ла миңә бирегеҙ!

Әсәһе өлтөрөп йөрөп уға быны рөхсәт итә. Ике ҡыҙ ҙа каретаға ултырып, ҡара урман яғына елдереп китә. Юлбаҫар ҡыҙ Герда самаһы була, тик ҡараҡайыраҡ, көслөрәк икән. Ҡара күҙҙәре генә моңһоу ҡарай.

- Улар һинә, мин асыуланмай тороп, теймәс, - ти ул Гердаға. - Һин батша ҡыҙымы әллә?

Герда барыһын да һөйләп бирә. Юлбаҫар ҡыҙ уны ҡосаҡлап ала ла:

- Хатта асыуланһам да һинә теймәҫтәр, үҙем генә асыуҙан үлтермәһәм, - тип ҡуя.

Улар емерек иҫке таш йорт янына килеп сығалар. Һаҡта өлкән ярһыу эттәр тора икән, әммә улар өрмәй, шулай өйрәтелгәндәр. Бүлмәнең уртаһында усаҡ яна.

Тамаҡ ялғағас, улар диуар буйындағы һалам өҫтөнә йәйелгән балаҫтар өҫтөнә йоҡларға яталар. Ястыҡ өҫтөндәге ҡуналҡала төнәгән күгәрсендәр ҡыҙҙарҙы күреп ҡорошоп китәләр. Юлбаҫар ҡыҙ береһенең тәпәйенән эләктереп, ялпылдата атып бәрә.

- Һине бысаҡ менән тырнап ҡурҡытырға ярата инем. Ярай инде, бар Лапландияңа! Тик бик шәп сап, Герданы Боҙ батшабикә янындағы һөйөклө дуҫы эргәһенә елдереп алып барып етker!

Болан шатлығынан һикереп китә.

- Кейемдәреңде ал, - ти ул Гердаға, - тик муфтаңды бирмәйем, бик оҡшаттым. Ана, әсәйемдең терһәккә етеп торған бейәләйен ал, хәҙер уның жизәле ҡеүәткә эйә икәнлеген әйтеп, Гердаға ла көс өҫтәүен һорай. Әбей ниндәйҙер яҙмалар сығарып уҡый-уҡый ҙа, былай ти:

- Күрмәйһеңме ни, был ҡыҙҙа ни тиклем ғәйрәт! Яланаяҡ көйө ул ярты ер йөҙөн үтеп сыҡҡан, уға кешеләр ҙә, хайуандар ҙа ярҙам итергә тора! Уның бөтә көсө - саф йөрәгендә! Мин уға шунан да артығын бирә алмайым




- Ә бына бында ҡарт болан, - тип күрһәтә ул Гердаға. - Һәр кис мин уның муйынын үткер бысаҡ менән тырнап торам - дер ҡалтырап төшә!

Ҡыҙ был юлы ла шулай итә, шарҡылдап көлә, ә меҫкен хайуан тыпырсынып һикереп китә.

Юлбаҫар ҡыҙ бысаҡты янына һалып ята, шунан Герданан белгән-күргәндәрен яңынан һөйләтә. Бер ҡулына бысаҡ тотоп, икенсеһе менән Герданы ҡосаҡлап, яңы танышы йоҡлап китә.

Ҡото осоп йоҡлай алмай ятҡан ҡыҙыҡай ҡапыл күгәрсендәрҙең тауышын ишетә:

- Гөлдәр-гөлдәр! Ә беҙ Кайҙы күрҙек! Уның санаһын аҡ тауыҡ йөкләп алғайны. Ә үҙен санаһына Боҙ батшабикә ултыртҡайны. Батшабикә беҙҙең оябыҙ ягына тынын өрҙө лә, ҡустым менән минән башҡа бар туғандарыбыҙ туңып үлде.

- Ә ҡайһы яҡҡа китте улар? - тип һорай һаман Герда.

- Лапландиягалыр - шунда бит мәңгелек туңлыҡ, боҙҙар. Бынау бәйле боландан һора, ул беләлер.

- Эйе, унда боҙлоҡ, ҡар тауҙары! Бар тирә-яҡ ялт-йолт килеп тора. Боҙ батшабикә унда йәйгеһен йәшәй, ә ҡышҡылыҡҡа Төньяҡ ҡотопҡа, Шпицберген утрауына китә!

Юлбаҫар ҡыҙ Гердаға асыуланып, шым ятырға ҡуша.

Иртәнсәк Герда ишеткәндәрен һөйләп биргәс, юлбаҫар ҡыҙ уйсан ғына:

- Ярай- ярай... Ә һин Лапландияның ҡайҙа икәнен беләһеңме һуң? - тип боландан һорай.

-Белмәйсе, - ти болан. - Шунда тыуып үҫтем бит!

Юлбаҫар ҡыҙ Гердаға әсәһе йоҡлап киткәс, берәй нәмә уйлап табырға вәғәҙә итә. Үҙе әсәһе янына барып, танауын күгәрткәнсә семтей ҙә, йәнәһе, иркәләнә, уға шешәнән нимәлер эсерә. Тегеһе йоҡлап та китә.

Шунан был уҫалҡай болан янына килә:

- Ҡеүек йәмһеҙ ҡуллы булып күренерһең инде, - тип шарҡылдай.

Ул Герданы боланға ултыртып, осоп төшмәһен өсөн хатта бәйләп ҡуя, аҫтына бәләкәс кенә мендәр ҙә һала хатта.

Герда шатлығынан илап ебәргәс:

- Етер, шыңшыма, йәнемде көйҙөрөп! Шатланырға кәрәк. Мә, ике түтәрәм икмәк, тултырма - ас йөрөмәҫһең! - тип уны юлға оҙәрләй.

Герда тоҡтап ҙур бейәләй кейгән ҡулдары менән юлбаҫар ҡыҙҙы ҡосаҡлап ала, хушлаша.

Эттәрҙе бәйләп, ҡапҡаны асыуы була, болан елдереп сығып та китә. Соҡор-саҡырлы, ҡыуаҡлы ер өҫтөнән осоп ҡына барған ҡеүек саба ул. Бүреләр олой, ҡоҙғон ҡысҡыра - ә улар елә лә елә. Ҡапыл алда күк йөҙөндә һаҙағай күренә.

- Ҡара, был минең ҡәҙерлем - төньяҡ һаҙағайы! - тип шатланып ҡысҡырып ебәрә болан.

Алған икмәк тә, тултырма ла бөтә. Алда Лапландия күренә.

## ЛАПЛАНД ҺӘМ ФИН ӘБЕЙҘӘРЕ

Улар ергә һеҙеп бөткән аласыҡ янында туҡтап, иңкәйеп кенә инеп булырлыҡ ишек аша эскә үтәләр. Унда сыра яҡтыһында лапланд әбекәйе балыҡ ҡурып булаша икән. Ҡыҙыҡай өшөүҙән һүҙ ҙә әйтә алмай дерелдәй. Болан үҙ хәлен дә, Герданыҡын да һөйләп биргәс, әбекәй ҡағыҙы булмағанлыҡтан, кипкән балыҡҡа яҙып, таныш фин ҡатынына бирергә ҡуша. Ул Боҙ батшабикә һарайына яҡын йәшәй, ни эшләргә икәнен өйрәтер, ти.

Ҡунаҡтар тамаҡ ялғап ала ла әбей әйткән Финмарк тигән төбәккә уҡтала.

Фин әбейе бөтөнләй ишекһеҙ, әммә бик эҫе итеп яғылған аласыҡта йәшәй икән. Ул хатты уҡып, ятлап ала ла, кипкән балыҡты һалып, аш бешерергә ҡуя.

Болан иһә уның хатта елдәрҙе бер епкә төйнәй белгән мөғ-

Бынан ике саҡрым ерҙә Боҙ батшабикә ерҙәре башлана. Герда Кай янына үҙе генә үтә ала. Малайҙың йөрәгенә, күҙенә ингән көҙгө ярсыҡтарын сығарып алмай тороп, ул үҙен иң шәп ерҙә йәшәй тип һанаясаҡ. Ҡыҙҙы ҡыҙыл еләкле ҡыуаҡ янында ҡалдыр ҙа, үҙең уҡтай елеп кире ҡайт!

Әбей Герданы боланға бәйләп ултырта, ҡабаланып, ҡыҙ хатта аяҡ-ҡулына кейергә лә онота. Улар әбей әйткән ҡыҙыл еләкле ҡыуаҡ янына барып туҡтай. Болан эре күҙ йәштәрен түгеп, кире елдерә, ә Герда яланаяҡ-яланҡул килеш боҙ бушлыҡта алға китә. Ҡыҙыҡайҙы барған һайын эрерәк, ҡуйыраҡ булып яуған ҡар туҡтатырға тырыша. Уларҙың ҡасандыр Кай ҙурайтҡыс быяла аша күрһәткәненә оҡшаштары ла, йылан, әнәле хайуан кеүектәре лә бар, имеш. Үҙҙәре ап-аҡ, тере икән, ти.

Герда белгән доғаларын уҡырға тотона. Ҡапыл ҡуйы томан эсендә яҡтылыҡ таратып, фәрештәләр төшөп, ҡыҙҙы уратып ала. Һыуыҡты ла һиҙмәй, Герда алға ынтыла.

Ә Кай был ваҡытта ни эшләгән, тиһегеҙ? Әлбиттә, ул ҡыҙҙы иҫенә лә алмай, ә ҡыҙ ғына тора икәне ҡайҙан башына инһен!

## БОҘ БАТШАБИКӘ ҺАРАЙЫНДАҒЫ МАЖАРАЛАР

Боҙ батшабикә һарайын бурандар өйгән дә, елдәр ишек-тәҙрә уйған икән. Бүлмәләре төрлө ҙурлыҡта, күҙ ҡамашырлыҡ ап-аҡ, йымылдап тора, барыһы ла буш икән, ти.

Төньяҡ һаҙағайы теүәл генә арауыҡта төрлөсә итеп яҡтылыҡ ташлай. Әммә бында бер ваҡытта ла бер йән эйәһе лә килеп байрамдар ҙа үткәрмәй, уйнамай, сәй эсеп тә ултырмай.

Өлкән залдың уртаһындағы туңып ватылған күлдең мендәрсә бер тигеҙ генә ярсыҡтары өҫтөндә Боҙ батшабикә ултырырға яратҡан. Был урынды донъялағы иң камил, аҡыл сағылышы көҙгөһө тип һанаған, ти.

Кай һыуыҡтан күгәреп ҡатһа ла, батшабикә үпкәндән бирле быны һиҙмәгән. Боҙ ярсыҡтарын төрлөсә һалып, биҙәктәр эшләп тик ултыра, ти. Боҙ батшабикә Кайға был кисәктәрҙән "мәңгелек" тигән һүҙҙе яҙһа, үҙе теләгәнен эшләү мөмкинлеге, бар донъяны һәм тимераяҡ бүләк итергә һүҙ биргән. Тик малай бер нисек тә улай тип яҙа алмай ҙа ҡуя икән.

Бер мәл Боҙ батшабикә янартауҙарҙы әҙерәк ағартып, йәгни, туңдырып ҡайтырға сығып киткән. Малай иһә кәрәкле һүҙҙе нисек яҙырға тип баш ватып, урынында ҡатып тик ултырған.

Шул мәл дәү залға Герда килеп ингән дә, уны күреп, ҡосаҡлап алған:

-Кай, бәғеркәйем, таптым бит һине, ниһайәт!

Ә малай бер ни һиҙмәгәндәй, аңшайып тик ултыра. Герда илап ебәргән. Уның ҡайнар күҙ йәштәре Кайҙың күкрәгенә төшкән, йөрәгенә үк үтеп инеп, ундағы көҙгө остоғон да, боҙҙо ла иреткән дә ҡуйған, ти. Кай ҡыҙға күтәрелеп ҡараған һәм теге саҡтағы рауза сәскәләре араһында йырланған йырҙы ишеткән. Малай ҡапыл илап ебәргән, шул ыңғай күҙендәге ярсыҡ та килеп сыҡҡан.

- Герда, йәнекәйем, һин ҡайҙа булдың? Мин бында нисек килеп эләккәнмен, ҡайҙа беҙ? - тип тирә-яғына аптырап ҡараған. - Ҡайһылай һыуыҡ! Ниндәй бушлыҡ!

Улар ҡосаҡлашып, шатлыҡтан бер илаған, бер көлгәндәр. Былар өсөн һөйөнөп, хатта боҙ кисәктәре лә бейей башлаған да үҙлегенән "мәңгелек" тип яҙылып ятҡан да ҡуйған, ти. Тимәк, малай хәҙер үҙе теләгәнен эшләй аласаҡ бит!

Герда үбеп алғас, Кай яңынан терелеп, алһыуланып, көсәйеп киткән. Улар етәкләшеп һарайҙан сыҡҡан да ҡайтыр яҡҡа юл тотҡандар. Ҡыҙыл еләкле ҡыуаҡ янында көтөп торған боланға ултырып, алға елдергәндәр.

Ҡыҙ үҙенә ярҙам иткән һәр кем янына инеп сыҡҡан, рәхмәт әйткән. Юлда хатта алтын каретаға ултырып алған теге юлбаҫар ҡыҙ менән дә осрашҡандар. Лапландия сигендә болан менән хушлашып, тыуған ҡалаларына юл тотҡандар.

Яҙ башланған, урман-ҡырҙар йәшәргән, ҡоштар һайрай башлаған.

Тыуған ҡалалары ҡыңғырау тауыштары менән ҡаршы алған. Улар үҙҙәре йәшәгән осормаға күтәрелеп, ишек аша үткәндә үҙҙәренең бик ҙурайғанын аңлағандар. Йәрәктәре генә сабыйҙарса саф ҡалған. Элекке урында осрашып, улар ҡулға ҡул-тотоношоп, рауза сәскәләре тураһындағы йырҙы иҫтәренә төшөргәндәр һәм бар ҡайғыларын онотҡандар.

Ә урамда йылы, йомарт йәй уларҙы шат сәләмләгән.

**Гүзәл СИТДИҠОВА тәржемәһе.**

**(Аҙағы. Башы 2-се һанда).**

ӘЙТЕШ

**Ағымдағы йылыбыҙ ваҡиғаларға бик бай булмаҡсы: Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы, Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Әҙәбиәт йылы, Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиты һ.б. Ошоларҙы иҫтә тотоп, был ваҡиғаларға һәм уларға бәйле көнүҙәк проблемаларға уҡыусыларыбыҙҙың айырата иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында әйтеш башлайбыҙ. Шиғри диалогты Көфө сәсән һәм Өшөрә сәсәниә алып бара. Улар әйтеш барышында ваҡыты-ваҡыты менән әңгәмә юҫығын йылдың билдәле ваҡиғаларына бәйле үҙгәртеп торасаҡ.**
**Әйтеште йыл башында "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" битендә башлап ебәргәйнек һәм бөгөн шундағы әйтештәрҙе баҫтырабыҙ. Кемгә уңайлы, әйтеште ошо уҡ биттә дауам итә ала. Шулай уҡ әйтеште кеҫә телефоны аша СМС менән ебәрә алаһығыҙ: +7-937-835-34-74**
**"Киске Өфө"нөң электрон почтаһы ла һеҙҙең ҡарамаҡҡа: kiskeufa@ufacom.ru**
**Шарттар шундай:**
**- текстарығыҙ псевдоним менән яҙыла;**
**- текстар 1-6 куплеттан тора, оҙон текстар ҡабул ителмәй: ҡыҫҡалыҡ таланттың һеңлеһе, тиҙәр.**
**- бирелгән теманан ситкә китеш шулай уҡ ҡабул ителмәй.**
**Хәйерле сәғәттә! Еңеүселәрҙе матур бүләктәр көтә.**



# КЕМ ЗАМАНДЫҢ ГЕРОЙЫ?

**КӨФӨ:**
Һаумыһығыҙ, туғандар,
Көнгә битен йыуғандар,
Иртәселдәр, уңғандар,
Башҡаларҙы йылытам, тип
Өшөгәндәр, туңғандар.
Аҙашҡанға юл күрһәтеп,
Йылы усын һуҙғандар,
Юрғандары самаһына
Аяҡтарын һуҙғандар...
Әйтегеҙсе, ниңә заман
Атыбыҙ һуң сығынлай?
Ниңә һаман был илебеҙ
Көрсөктәрҙән сығалмай?
Ниңә беҙҙе яҡтылыҡҡа
Эйәртеүсе табылмай?
Шундай шәхесте көтә
Йөҙ мең кеше, миллион...
Ә бит ундай шәхес-зат
Арабыҙҙа йөрөй ул.
Ниңә уны күрмәйбеҙ,
Кем замандың геройы?

**ЙӘНБИКӘ:**
Һаумыһығыҙ, туғандар,
Өшөгәндәр, туңғандар,
Ә барыбер уңғандар!
Заман аты сығынлай,
Көрсөктәрҙән сығалмай,
Ят бауырҙы һыйындырып,
Яттың күңелен уйлаһаң,
Килгән-киткән кәп ҡорһаҡты
Тығындырып һыйлаһаң,
Аҫыл затты юҡ иткән
Әпкәләй, Юха, Ялағайҙы
Ҡуйынында үрсетһәң,
Ас үпкәм күренмәһен, тип,
Иренеңде ҡымтыһаң,
Һис сыҡмабыҙ көрсөктән,
Ҡаңғырырбыҙ, маҙарбыҙ.
Дейеүҙәрҙән
Эс-бауыры телгеләнгән
Урал көнөнә ҡалырбыҙ...
Уйлашайыҡ, туғандар,
Кәңәшле эш тарҡалмаҫ,
Халыҡҡа байман табырлыҡ
Сара эҙләп ҡарайыҡ!

**АҠҺАҠ КЕЙЕК:**
Заман батыры булырлыҡ
Барҙыр ағай, апайҙар,
Тик улар, әҙәп һаҡлап,
Атылып сыға һалмайҙар.
Ул булалыр белем йыйған,
Сәйәсәттә - дағалы,
Хужалыҡты тота белгән
Илдең рухлы ағаһы.
Яҡтылыҡҡа кәрәктер ҙә
Үҙебеҙгә ынтылыу,
Милләтеңде берләштереү,
Йәштәрҙә рух уятыу.
Барса йөктө кәрәкмәйҙер
Әҙерләү "ҡашҡа" өсөн,
Тәрбиәгә биреү кәрәк
Ҡулдан килгәнсә көсөң.
Белем биреүсе алһасы
Тәрбиә эшен ҡулға,
Сәсәндәре, ҡыйыулыҡта,
Күрһәтһен барыр юлға.

**НУРБИКӘ:**
Милләтте алға етәкләр
Үҙ тарихын белгәне.
Күрербеҙме шундайҙарҙың
Майҙандарға килгәнен?
Көрсөктән сығыу юлын
Ябай эштән башлайыҡ,
Өндәмә, саҡырыуҙарҙан
Ысын эшкә күсәйек.

**МАНСУРА:**
Ысын эшкә күсеүселәр
Нурбикәгә ҡушылыр.
Заман батыры килгәнсе
Тик ятыу зыян булыр.
Үткәндәрҙе белеү яҡшы,
Үткәнде белеү кәрәк.
Атай-олатай тормошо,
Үткәндәр беҙгә терәк.
Һәр нәмәнең үҙ урыны,
Һәр ваҡыттың үҙ зары.
Бөгөнгө көндә мәсьәлә -
Юғалып ҡалмау бары.
Юғалмаһын атамалар,
Яҙылһын үҙ телендә.
Ике телгә хоҡуҡ икән
Башҡортостан илемдә.
Бик күбәйеп китеп бара
Атамалар сит телдә.
Берәй башҡортса яҙылған
Күрҙегеҙме сит илдә?
Ошондай төрлө һорауҙар
Туплап китһәң - ҡайҙа ла.
Эшләнһә һәр бәләкәй эш
Олоһона юл һала.

**АЛТЫНБИКӘ:**
Зарланыуҙар хас булмаҫ батырға,
Илауҙар ҙа булыр ят уға...
Үҙ халҡының мәнфәғәтен яҡлап
Батыр килер һүҙле майҙанға!
Ауылдарҙа әле шау сәскәлә
Башҡортҡа ят булған эскелек,
Күп әҙәмдәр шунда батып бара
Сығарайыҡ шунан иң элек!
Сыҡҡас, йүнәләйек мәсеттәргә
Ул ҡотҡарыр әҙәм балаһын,
Мәсеттәр тик хәйер бирер өсөн
Керер урын булып ҡалмаһын!
Төҙәтәйек үҙебеҙ ҙә һиҙмәй
Ғаиләлә киткән хатаны!
Телен өйрәтһендәр балаһына
Һәр бер әсә, һәр бер атаһы!
Һәр кем бирә алһа үҙ өлөшөн
Үҙе торған ауыл, ҡалала,
Ошо инде беҙҙең батырыбыҙ,
Тиеп әйтер беҙҙең замана!

**ИЛҺАМЛЫ ҠАНАТ:**
Кәрәкмәй беҙгә илаҡ,
Кәрәкмәй беҙгә кулак,
Яҡшы нәмә тыңларға
Кәрәк бик һиҙгер ҡолаҡ.
Яҡшылыҡты ишеткәс,
Телдән-телгә төшөрткәс,
Эш эшләргә ҡул кәрәк,
Тырышлыҡтар мул кәрәк.
Шәпте күрер күҙ кәрәк,
Дәртләндерер һүҙ кәрәк,
Ауырлыҡтар килгән саҡта
Сытыймаҫтай йөҙ кәрәк.
Әбей-бабай эскәндә
Рүмкә тотмаҫ ир кәрәк,
Еребеҙҙе һуғарырға
Күҙ йәш түгел, тир кәрәк.
Шәкәр түгел, сәскәнән
Һайлап йыйған бал кәрәк.
Емтек йыймаҫ бөркөттәр -
Хәләл тапҡан мал кәрәк.

**ЯҠШЫ ӨММӘТ:**
Бында бер шағир һүҙҙәрен
Иҫкә алмайса булмай:
"Мин яҡтылыҡ эҙләмәйем
Мунсала янған шәмдән.
Үҙ донъямды яҡтыртырлыҡ,
Шөкөр, бар үҙ ҡояшым.
Һәр кем хәленән килгәнсә
Яҡтырта үҙ донъяһын!"
Бик шәп әйткән Рамай Ҡаһир,
Артыҡ бер һүҙ кәрәкмәй!
Шулай йәшәй тырышҡандар -
Яҡтыртып үҙ донъяһын!
Кем килешмәй - бәхәсләшһен,
Бәлки, тыуыр хәҡиҡәт.

**КӨНБИКӘ:**
Бөгөнгө заман геройы
Бар ул бар, уны беләм.
Шундай берәүҙең ҡылығын
Хәҙер һеҙгә лә теҙәм.
Төплө белемдәр алды ул,
Һатмайым мин сафсата.
Атайым, тип, әсәйем, тип,
Туғандар, тип, йән ата.
Ғаиләһе ныҡлы ҡәлғә,
Ситтән йәрҙәр эҙләмәй.
Ҡатынына, биш балаға
Иғтибарын йәлләмәй.
Тик башҡортса һөйләшергә
Рөхсәт өйө эсендә.
Барыһына ярҙам итә
Ҙур яуаплы эшендә.
Хәмергә яҡын да килмәй,
Иманы ныҡлы булғас.
Ҡоромаҫ башҡорт тамыры
Бәрәкәт һәм ҡот ҡунғас.

**ЯҠШЫ ӨММӘТ:**
Асыҡлап теҙҙе Көнбикә
Геройҙың сифаттарын.
Бындай шәхестәргә була
Ҡурҡмай-өркмәй тапшырырға
Ейәндең киләсәген!

**ӨШӨРӘ:**
Алыҫ тиеп тормаған,
Ауыл тиеп тормаған,
Ут үтмәгән тимәгән,
Һыу үтмәгән тимәгән -
Юл бар икән йәнәшә.
Ғаилә менән кәңәшә -
Бөтөп барған ауылда
Яйлап эш башлай ул да:
Башта һата сәй генә,
Уныһы ла йәй генә,
Шунан ҡора аласыҡ,
Әй шоферҙар, ала сыҡ
Сәй, шешлеген, бүтәнен,
Урман-ҡырҙа үҫкәнен,
Миндеген, йүкә балын -
Белмәй хужалар талым!
Генератор ҡуйғандар,
Кафеһын да ҡорғандар,
Киткән ауыл терелеп,
Йорттар ҡалҡа теҙелеп!
Әкиәт тимә, ҡоҙа,
Был ауыл Ҡолмас була!
Ауылы юғалманы -
Шул заман уҙаманы!

**ЙӘНБИКӘ:**
Илдең биле ныҡ булһын,
Уға шундай баш кәрәк.
Илгә баш булырҙай ир
Олоно оло итһен,
Кесене кесе итһен.
Тарихта балыҡтай йөҙһөн,
Илдәр гиҙһен,
Тел белһен.
Киләсәккә ҡарсығалай
Дәүерҙәр аша баҡһын.

**КӨНБИКӘ:**
Иң ҙур герой тиер инем
Ғәйнетдинов Юлайҙы,
Көйҙәрҙе генә түгел,
Һаҡлап ҡалды ҡурайҙы.
Салауат Хәмиҙуллинды ла
Геройға тиңләр инем.
Баһалап бөтмәҫлек хеҙмәт -
Халҡым баһалар, тием.

**ШӨШ:**
Заман геройы булыр
Тос дәүмәл үҫеш алған,
Илдең хәлен барлаған,
Бар халыҡты аңлаған
Башҡорт атлы уҙаман.
Геройҙар күп булмайҙар,
Берәү булмай ундайҙар,
Йөҙөн асып хаҡлыҡҡа,
Күренһендәр халыҡҡа.
Беҙ ятмаҫтыр һандыҡта -
Асыҡларбыҙ атын да.

**БӘНДӘБИКӘ:**
Изгелектәр ҡылмаһаҡ,
Динебеҙгә ҡайтмаһаҡ,
Бер-беребеҙҙе тартмаһаҡ,
Ил-көн тиеп борсолған,
Милләт данын арттырыр
Ул-ҡыҙҙар ҡалдырмаһаҡ,
Киләсәгебеҙ булырмы?
Ау! Киләсәгебеҙ булырмы?
Милләт бишеген бәүетер
Иманлы ҡыҙ үҫтерер,
Ерен һаҡлар батыр ул
Илендә буй еткерер -
Иртәгәһе буласаҡ
Бары шундай халыҡтың...

**ШӨШ:**
Ил тигәнде аңлайбыҙ,
Дуҫтар ике юҫыҡта.
Рәсәй иле оҙон да,
Башы алыҫ офоҡта,
Шәфәҡ ҡалҡыр ҡойроҡта.
Офоҡтан шәфәҡҡә хәтлем
Туҡһан туғыҙ йорт-ара.
Башҡорт иле, башҡорт теле -
Күңелдә ята яра.
Башҡорт халҡы...
Бөгөнгөһө,
Киләсәге...
Ни сара?
Кем һорау ҡуймайҙыр хәҙер:
-Эрәсәй ҡайҙа бара?
Рәсәй көслө булһын, тип,
Ни ҡылмаҡ? Ниндәй сара?
Бының өсөн үҫешһен
Туҡһан туғыҙ йорт-ара!
Шул хаҡта ныҡ әйтелде
Өсөнсө ҡоролтайҙа.
Көфө һалды йомаҡты:
"Эйәртеүсе эҙләгеҙ!"
Әлеге шул ҡытлыҡты
Нисек, ҡасан сисәбеҙ?
Әй, арҙаҡлы егеттәр,
Ҡапҡағыҙға киләбеҙ!

**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Милли бурысын тәрән аңлаған синыф ҡына халҡын етәкләр һәм ысын милли азатлыҡ юлына алып килер. Ҡаҙаҡтар бөгөн киләсәктәренә бик ышаныслы ҡарайҙар. Мәктәптәр ябылмай, ҡаҙаҡ теле лә ике генә сәғәт уҡытылмай...*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# СӘЙ ЯРАТАҺЫҢМЫ...
## әллә ҡәһүәме?

■ Сәйҙе лә, ҡәһүәне лә бик яратып эсәбеҙ, әммә ғалимдар араһында уларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ тигән бәхәс барғанын күптәр белмәйҙер әле. Йәнәһе, сәйҙе һәм ҡәһүәне "дөрөҫ" итеп эсеү күп ауырыуҙарҙан ҡотҡара. Британия менән Америка ғалимдары ҡара сәй иммунитетты нығыта, ти. Бер ай дауамында бишәр кешенән торған ике төркөм һынау үткән: беренсе төркөм - сәй, икенсеһе ҡәһүә эскән. Һынауҙарҙың аҙағында ҡәһүә эсеүҙең әллә ни файҙаһы булмауы асыҡланған. Бынан тыш, ҡара сәйгә ҡарағанда, йәшел сәй яҡшыраҡ, тип раҫлай ғалимдар. Йәшел сәй ҡан тамырҙарын таҙарта, метаболизмды әүҙемләштерә, ул витаминдарға һәм антиоксиданттарға байыраҡ. Спортсылар йәшел сәйгә өҫтөнлөк бирергә кәрәк, сөнки ул зарарланған ҡүҙәнәктәрҙе тергеҙә, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын нығыта. Әйткәндәй, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә менән ауырыусылар аҡ сәскә, бөтнөк сәйҙәренә өҫтөнлөк бирһә лә була. Ҡәһүәләге кофеин күпкә тиҙерәк үҙләштерелә, шуға ла ике-өс тамсы ҡәһүәнән дә кеше үҙен яҡшыраҡ тоясаҡ. Әммә сәй кофеины организмдан оҙағыраҡ сығарыла. Ҡәһүә Альцгеймер ауырыуын иҫкәртә, майҙарҙы яндыра һәм асығыу тойғоһон баҫа.

■ Һомғол буйлы булыуығыҙ менән ғорурланаһығыҙ һәм шуға ла үҙегеҙҙе сәләмәт тип уйлайһығыҙмы? Ғалимдар раҫлауынса, һомғол буй һаулыҡ күрһәткесе була алмай. Һуңғы ваҡытта артыҡ ауырлыҡ менән яфаланмаған кешеләрҙә лә диабет сире йыш осрай икән. Белгестәр әйтеүенсә, ябыҡ дүрт кешенең берәүһе диабет сире һәм метаболик һимереү алдында тора. Метаболик һимереү мәлендә кешенең май массаһы уның мускул массаһына ҡарағанда күберәк була. Бындай кешеләр ябыҡ, ләкин яҡшы формала түгел, бының төп сәбәбе - дөрөҫ туҡланмау.

■ Интернетҡа бәйләнгәнлек рәсми рәүештә психик тайпылыш тип табылмаһа ла, психологтар был турала 20 йылдан ашыу һөйләй. Тәүгеләрҙән булып Айвен Гольдберг 1995 йылда был хәүефте телгә ала. Һуңғараҡ уға башҡа белгестәр ҙә ҡушыла. Инглиз психологы Марк Гриффитс интернетҡа бәйлелекте билдәләүсе 6 критерий төҙөһә, психиатр Кимберли Янг махсус тест уйлап таба. Был мәсьәлә айырыуса Ҡытай ғалимдарын борсоуға һала, 2008 йылда интернетҡа бәйлелек милләткә зыян килтерә, тип иғлан ителә. Тап шул уҡ осорҙа бындай кешеләрҙе дауалау өсөн реабилитация үҙәктәре барлыҡҡа килә. АҠШ был типтағы үҙәктәрҙе 2009 йылда төҙөй. 31 илдә йәшәгән 89 мең кешелә тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң, ғалимдар шундай һығымтаға килә. Әгәр ҙә ул йәшәгән дәүләттә йәшәү сифаты түбән булһа, кеше интернетта йышыраҡ "ултыра". Реаль тормоштағы стрестарҙан ҡасып, кеше виртуаль тормош упҡынына ырғырға ла әҙер. Тора-бара улар реаль һәм виртуаль тормош араһындағы сиктәрҙе тоймай башлай. Шуға ла был проблеманың нигеҙендә йәшәү, эшләү, башҡа социаль шарттар менән ҡәнәғәт булмау ята. Гонконг университеты ғалимдары иҫәпләп сығарыуынса, интернетҡа бәйлелек Иран, Израиль, Ливан, Төркиә кеүек Яҡын Көнсығыш илдәрендә күберәк, ә Төньяҡ һәм Көнсығыш Европала әҙерәк.

*СӘЙӘХӘТНАМӘ*

# ҠАҘАҠТАР ҒОРУР, ҮҘАЛЛЫ...



**Ҡырпағайҙың (ноябрҙең) тәүге көндәрендә Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһына Ҡаҙағстан иленән саҡырыу килде. Баҡһаң, ҡаҙаҡ яҙыусылар ойошмаһының төҙөлөүенә лә 80 йыл тулған һәм уны Алматы ҡалаһында билдәләйҙәр икән.**

Бындай сараға барыу минең өлөшкә тейгәс, бер ни тиклем ҡыуанып та ҡуйҙым. Сөнки СССР тарҡалып, Ҡаҙағстан үҙаллы дәүләт булып киткәс, ҡаҙаҡ бауырҙаштарыбыҙҙың күңел төбөн, уйкисерештәрен белеп ҡайтыу килә ине күптән. Халҡының рухиәте был осорҙа ҡайһы йүнәлеш менән атлауын, беҙгә мөнәсәбәттәрен, матди һәм милли үҫештәрен күреү менән булһа ла ҡармап ҡарағы килә ине. Телефон аша һөйләшеп, Ҡайырниса тигән ханым компьютер аша Өфө - Мәскәү - Алматы маршрутына билет ебәрҙе. Ниһайәт, 2 ноябрь иртәнге сәғәттә Мәскәүгә остом. Көн болотло ине, әммә ҡара болоттар йыртығынан аҫта фәлән тиклем ер күренә. Күҙҙәрем оҙонса тәҙрә аша түбәндәге шул ерҙәрҙе байҡай. Ауыл хужалығы кешеһе булғас, күҙҙәрем Өфө менән Мәскәү араһында сәселгән, хәҙер йәмйәшел булып ятҡан ужым баҫыуҙарын, яңы сәсер өсөн ҡап-ҡара итеп туңға һөрөлгән игенлекте эҙләй. Әммә улар юҡ. Башҡортостан өҫтөндә булһа кәрәк, уймаҡ ауыҙындай ғына ҙурлыҡта бер нисә уйым күренеп ҡалды. Ләкин Мәскәүгә тиклемге арала сәселгән ужым да, ҡарайып күренгән һөрөнтө ер ҙә күрмәнем. Улар булмағас, иркен көтөүлектәрҙә мал-тыуар йөрөйҙөр, тим. Яландарҙы, һыу буйҙарын эҙләйем. Әммә мыжғып йөрөгән һарыҡ, йылҡы, һыйыр малдары көтөүҙәренең әҫәре лә юҡ. Әле бит ер өҫтөнә ҡар ятмағайны. Шулай уҡ көҙгө ураҡтан һуңғы оҙон-оҙон итеп өйөлгән эҫкерттәрҙе, кәбәндәрҙе лә шәйләмәнем. Күңелде шунда уҡ ҡурҡыу тойғоһо солғап алды. Сәсеү булмағас, урыу ҙа юҡ, тимәк, мал да, ит тә, май ҙа юҡ булып сыға лабаһа...

...Шаулы Мәскәүҙе ҡалдырып, сәғәт ярымдан һуң ҡаҙаҡ иленә - Алматыға остоҡ. Самолет һауаға күтәрелгәс, һауаның болотһоҙ булыуынан файҙаланып, тағы ла самалап ерҙе күҙәтәм. Мәскәү өлкәһе, Рязань, Пенза, Һарытау өлкәләре өҫтөнән осабыҙҙыр, тип фаразлайым. Ваҡ-ваҡ урманлы ер яйлап асыҡлана барҙы. Күрәһең, Булығаға етәбеҙ, яландарҙы ултыртылған ағастар һыҙмаһы бүлгесләнә. Һәр төрлө ҡала-ҡасабалар ҙа, нөктә генә булып күренгән машиналар ҙа бихисап. Әммә аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә торған яландар буш, унда бер тереклек тә юҡ. Был хәл мине уғата аптыратты. Ә бит үткән Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илде лә, фронтты ла Сталиндың ошо төбәктәрҙәге колхоздары аҫыраны. Халыҡ көнө-төнө яланда, игендә, фермала эшләнә. Америка менән союздаш булғас, немец һыу аҫты кәмәләренән, бомбардировщиктарынан ҡаса-боҫа, океан аша бер нисә корабль Рәсәйгә аҙыҡ та ташығандыр. Әммә бындай оло илде корабль менән генә ташып туйындырып буламы? Юҡ, мең тапҡыр юҡ. Көнбайышта Брестан алып Волгаға тиклем Украина, Беларусь, Рәсәй өлкәләре немец оккупацияһы аҫтында ине. Ул төбәктәр, билдәле, совет армияһын, совет халҡын ашата, кейендерә, ҡорал да етештерә алмай ине, сөнки немец ғәскәре оккупация аҫтында ҡалған ҡалаларҙағы бөтә завод-фабрикаларҙы емереп, Германияға оҙатҡайны, тик бер аҙы ғына Уралға күсерелгәйне. Һуғыштың бөтә ауырлығын Волга буйы республикалары, Урал-Башҡортостан, Исәй-Свердловск өлкәһе, Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләре күтәрҙе. Алтмышынсы йылдарҙың аҙағына тиклем Уралдың һәр ҡалаһында "Урал - опорный край державы" тигән ғорурланырлыҡ яҙыуҙар эленеп торор булды...

...Ҡулда самолеттың осоу картаһы булмағас, дөрөҫ итеп иҫбатлап әйтеп тә булмай, әммә Мәскәү-Алматы рейсы буйынса осҡан "Боинг" Яйыҡты аша осоп сыҡҡас, әллә Аҡтүбә өлкәһенең төньяғы, әллә Ырымбур өлкәһе, әллә беҙҙең Башҡортостандың иң көньяғында теҙелеп-теҙелеп ятҡан йәм-йәшел ужым баҫыуҙарын күрҙем. Күңелгә йылы ингәндәй булды. Юҡ, бында ҡырсылыҡ бөтмәгән икән. Тимәк, икмәккә мохтажлыҡ та, ҡәҙер ҙә бар, тип уйланым. Шулай уҡ аҫта, ниндәйҙер таулыҡ буйында өйөр-өйөр йылҡы, һарыҡ көтөүҙәре күренде. Ҡара ла, аҡ та күренә һарыҡтар. Ҡара төҫтәгеләре, тимәк, йыуан йөнлө һарыҡтарҙыр. Тимәк, был Ҡаҙағстан ере! Унан һуң бер йән эйәһе лә күренмәгән дала өҫтөнән бер ни тиклем осҡас, тағы ла көтөүҙәр, торлаҡтар күренеп, ярты сәғәттән Алматы аэропортына төшәсәкте иҫкәрттеләр.

Аэропортта тейешле тикшереүҙәрҙе үттек, әммә Мәскәүҙәге кеүек, ойоҡбаш эсен ҡараманылар, кейемең кеҫәһен дә тикшермәнеләр. Күрәһең, артыҡ ҡурҡмайҙар. Барыһы ла ҡаҙаҡ телендә ҡысҡырышалар, саҡырышалар. Аэропорттағы иғландар ҙа ҡаҙаҡса, һирәгерәк инглиз телендә яңғыраны. Урамға сыҡтыҡ. Унда исем-шәрифтәребеҙ яҙылған ҡағыҙҙарын өҫкә күтәреп тотоп тороусы ҡаршылаусылар менән осраштыҡ. Алматы ҡалаһына тиклем 30-35 минутлыҡ юл икән. Ҡаршы алырға килгән ҡаҙаҡ егете менән һәр кем үҙ телендә һөйләшеп киләбеҙ. Мине "Ай сере" тигән ҡунаҡханаға килтереп урынлаштырҙылар. Киске ашта ҡаҙаҡ яҙыусылар ойошмаһының юбилейына килгән Төркиә, Ҡытай, Тажикстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан, Татарстан, Мәскәү вәкилдәре менән осраштыҡ. Табын артында бер-беребеҙ менән таныштыҡ һәм үҙебеҙҙе таныштырҙыҡ. Беҙ, төрки телле халыҡтар, бөтәбеҙ ҙә үҙ телебеҙҙә сығыш яһаныҡ. Һүҙҙәрҙе асыҡ итеп әйтеп, яйлап ҡына һөйләһәң, бөтә һүҙҙәр тиерлек аңлашыла икән. Тик ҡытай вәкиле генә тәржемәсе ярҙамында телмәр тотто. Уның сығышын бик иғтибар менән тыңлап ултырҙым. Уларҙа һүҙ ҡеүәһе бик ҡиммәттер, телмәр тәрбиәһе бик ныҡ үҫешкәндер, тигән фекергә килдем. Ә бит һүҙ ҡәҙере китеүе, һүҙ ҡиммәтенең арзанайыуы йәмғиәттең дә арзанайыуы тураһында һөйләй. Йәмғиәт арзанайған һайын уны әллә күпме һәләкәттәр көтәсәге лә билдәле. Ниңәлер, ҡытай кешеһенең һалмаҡ, ышаныслы телмәренән шул ауаздарҙы ишеттем...

Иртә менән беҙ ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы Абай Ҡонанбаев һәйкәленә сәскәләр һалдыҡ. Унан һуң Ҡаҙаҡ Республикаһы дәүләт китапханаһында ойошторолған күргәҙмәлә китаптар ҡараныҡ. Үкенес, китаптар һатып алып булманы. Рәсәй аҡсаһына әйбер һатмайҙар булып сыҡты. Ҡаҙағсан яҙыусылар ойошмаһы идараһы рәйесе урынбаҫары Жапарбек Садыхан улы минең бик ҡыҙыҡһынып "Сыңғыҙхан" тигән китапты ҡарап тороуымды күргәс, һатып алып, уны миңә бүләк итте. Бик риза булып алдым. Китап ҡаҙаҡ телендә. Уның биттәрен асыу менән шуны аңланым. Ҡаҙаҡтар Сыңғыҙханды һис шикһеҙ үҙ кешеләре тип белә. Уның тормошон бөтә тулылығы менән өйрәнгәндәр.

...Төшкө аштан һуң Абай исемендәге опера һәм балет театрына йыйылдыҡ. Зал шығырым тула. Бында Ҡаҙағстандың 3 мең саҡрымға һуҙылған бөтә өлкәләренән дә вәкилдәр килгәйне. Башлап иң оло аҡындар һүҙ әйтте. Шунан саҡырылған ҡунаҡтарға һүҙ бирә башланылар. Беҙ Татарстан яҙыусылары идараһы рәйесе Рәфис Ҡорбанов менән алғы рәттә ултырабыҙ. "Башҡортостан" тип иғлан итә башлау менән сәхнәгә күтәрелдем. "Әссәләмәғәләйкүм Ҡаҙағстан! Әссәләмәғәләйүм ҡәләмдәш ҡаҙаҡ бауырҙаштарым!" тип оран һалғас, залдағы бар халыҡ аяғүрә баҫты. Ҡул саптылар. Мин халҡыбыҙ исеменән - уларҙы, ә улар беҙҙе - башҡорт халҡын тәбрикләне. Артабанғы телмәремдә мин Башҡортостандың яҙыусылар ойошмаһы, уның ижади көстәре, нәшриәттәр, баҫмалар тураһында ҡыҫҡаса һөйләнем. Шунан башҡорт менән ҡаҙаҡтың дөйөм тарихы тураһында телгә алып үттем. Бик күптәнән, мең йылдар элек, ҡаҙаҡ ҡаҙаҡ булып, башҡорт башҡорт булып формалашыу осоронда беҙҙең ҡаңлы, ҡыпсаҡ, таҙ, тиләү, табын, ҡуңғырат кеүек уртаҡ ырыу-ҡәбиләләребеҙ булыуы тураһында һөйләнем. Төрки ырыуҙары берләшеп, ханлыҡ, ҡағанлыҡ ойоштороп йәшәгән осорҙа йоғонтоло Арғын, Барын, Ширин, Ҡыпсаҡ тигән ғәскәри дүрт ырыу хан күтәреү, хан билдәләү хоҡуғына эйә булғандар. Был тарихи ысынбарлыҡ. Арғын һәм Ширин ырыуҙары ҡаҙаҡта булһа, Барын һәм Ҡыпсаҡ ырыуҙары башҡортта булған. Ошо мәғлүмәттәрҙе әйткәс, ҡаҙаҡтар тағы ла шаулатып ҡул сапты. Залдағы йәнләнеүҙән һиҙеп торам: улар минең был сығыштан бик тә ризалар һәм ҡыуанып хуплайҙар. Тәнәфестә әллә күпме ҡаҙаҡ милләтле кеше килеп: "Жаҡсы, жаҡсы баурдаш!" - тип ҡулды ҡыҫтылар. Мин дә бик күптәнән күрмәгән туғандарымды тапҡандай ҡыуандым. Донъяларыбыҙ айҡан да сайҡан булып киткән ошо заманда үҙең менән аңлашыу табырҙай "бауырҙаштар" барлығын тойоу ҡиммәтле хис икән. Тантаналы ултырышта президенттары Нурсолтан Назарбаевҡа бөтә саҡырылған ҡунаҡтарҙың ҡултамғалары менән хат-сәләм ебәрҙек. Әйтергә кәрәк, ҡаҙаҡ халҡы президенттарын бик ихтирам итә. Иртәгәһенә Ҡаҙағстан яҙыусылары һәм беҙ, ҡунаҡтар, Әл-Фараби исемендәге университетта Ҡаҙағстан милли әҙәбиәтенә арналған ғилми конференцияла ҡатнаштыҡ. 5 ноябрь иртә менән ҡайтыу яғына юлландыҡ.

**Шулай итеп, ҡаҙаҡ иленә барыуым да, ҡайтыуым да төштәге бер йыр кеүек булды. Ҡаҙаҡ теле ауаҙы ҡолағымда, ә моңо күңелемдә... Һәм һуңғыһы. Ҡаҙаҡтарҙың милли интеллигенцияһы синыф дәрәжәһенә етеп үҫешкән. Улар үҙ илдәренең төп хужалары, сәйәси, рухи етәкселәре. Милли бурысын тәрән аңлаған синыф ҡына халҡын етәкләр һәм ысын милли азатлыҡ юлына алып килер. Ҡаҙаҡтар бөгөн ғорур, үҙаллылар, киләсәктәренә бик ышаныслы ҡарайҙар. Мәктәптәр ябылмай, ҡаҙаҡ теле лә ике генә сәғәт уҡытылмай...**

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**

***✓ Көтөү инстинкты буйынса йәшәп, аңһыҙ рәүештә ғүмер һөрөргә һәм бер ни хаҡында ла уйламайынса, тормоштарын үҙ ағышына ҡуйырға мөмкиндәр.***

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ

**Халҡыбыҙҙа кинәйәләп, икәү осрашһа - баҙар, өсәү йыйылһа - йәрминкә, тип әйтеү ғәҙәте бар. Был, аңлағанһығыҙҙыр, ҡатын-ҡыҙ хаҡында, әлбиттә. Ҡыҙыҡ, ирҙәр йыйылғанда ни хаҡында гәп һуғаларҙыр, мәгәр мин белгән ҡатын-ҡыҙ араһында буш хәбәр, ғәйбәт һатып, ваҡытын заяға уҙғарыусылар юҡ, сөнки улар бөтәһе лә эш кешеләре. Нисек осто осҡа ялғарға, тормоштоң өҙлөкһөҙ һынауҙары алдында нисек юғалып ҡалмаҫҡа, бының өсөн нисек итеп сәләмәт булырға - бына минең әхирәттәр әллә ниҙә бер осрашып сәй эскәндә гәпләшеп ала торған темалар даирәһе.**



# АРҠАҢ ТӨҘ ИКӘН...

## тимәк, һин йәш һәм сәләмәт

Был юлы ла әхирәттәрем Рауза менән Миләүшә, килеп сығабыҙ, тип шылтыратҡас, ауылдан килтергән күстәнәстәр - сейә ҡушып ҡайнатылған ҡорот, ҡыҙыл эремсек, хуш еҫле бал, үлән сәйен өҫтәлгә сығарып ултырттым, ҡоймаҡ ҡоя һалдым. Йән дуҫтарың өсөн шунан да затлыраҡ һыйҙы ҡайҙан табырһың! Ах итте әхирәткәйҙәрем. "Эмм..." - бисмиллаһын әйтеп ҡорот ҡапҡан Миләүшә ләззәтләнеп күҙҙәрен йомдо:

- Билләһи, пенсияға сыҡҡас та ҡайтам ауылға! - тине ул.- Ҡаланың бисмиллаһыҙ яһалма аҙығын ашап, эсеңә сир алып йәшәү етте! Ҡартым да ҡасандан бирле һаташа инде, ауылда умарта тотоп ҡына ятыр инем, тип...

- Ауылда, елкәң булһа, мул йәшәйһең инде ул, - фекер ебен Рауза эләктереп ала. - Хәҙер ауыл табынын күрһәң! Ҡош һөтө генә юҡ. Элек тә ауыл кешеһе ризыҡҡа аптырап ултырманы, уңғандарҙың табыны һәр саҡ мул булды. Ә бөгөн апайҙар, еңгәләр, килендәр һыйға шул тиклем оҫтарған: муллыҡ янына зауыҡ, нәзәкәтлек тә өҫтәлгән. Нимә генә әҙерләмәй улар: салаттары, бәлеш, тәм-томдары ресторандыҡынан һис ҡалышмай, артыҡ булмаһа... Тик был ғына етмәй шул әле ауылда йәшәү өсөн, иң мөһиме - күңел тыныслығы кәрәк. Беҙҙең ауылда, мәҫәлән, айыҡ ир һирәк күренеш. Күп ғаиләләр ҡатын-ҡыҙ ҡулына ҡарап тора. Ағайымдан алып ҡына әйтәм: мәңге ҡыҙмаса булып йөрөй. Ялға ҡайтҡан арала ла яғанан алышырҙай булабыҙ. Ярай еңгәм ут шикелле: район үҙәгенә яҡын булғас, көн аралаш баҙарға йөрөп, бына әле беҙ тәғәмләп ултырған ошондай һөт ризыҡтары алып барып һатыу итә: һөт, ҡаймаҡ, май, ҡорот,ҡатыҡ, айран, эремсек...Үҙенең һатып алыусылары ла бар хәҙер, килгәнен көтөп торалар.

- Көн дә баҙарға ла йөрөп булмай шул,- ти Миләүшә бошоноп. - Һәр хәлдә, эремсекте үҙеңә өйҙә лә яһап була инде, сөнки мин уны башҡаса магазиндан алмаҫҡа булдым. Төрөлгән ҡағыҙына, һаҡланыу ваҡыты 5 көн, тип яҙылһа ла иртәгәһенә үк күпсеп, еҫләнеп, боҙола башлай. Көн дә һатып алырға кәрәк булып сыға. Ҡыҙым интернеттан бер мәҡәлә уҡытты - сәстәрең үрә торор. Төрлө ризыҡ хаҡында мәғлүмәт бар. Минең үҙемде эремсек ҡыҙыҡһындыра: беҙҙең йәштә уны күберәк ашарға тура килә, кальций кәрәк организмға.Тик әлеге беҙ магазиндан алған эремсектә... эремсектән башҡа бөтәһе лә бар, тип яҙалар. "Бөтәһе лә" тигәне һөт ризығы өсөн ят булған шикле өҫтәмәләр, һәр төрлө үҫемлек майҙары, киптерелгән һөт, манный ярмаһы, ферменттар, кальций һәм башҡалар...

*- Мин үҙем ситтән килтерелгәнде түгел, ә үҙебеҙҙә етештерелгәнде, мөмкин тиклем тәбиғи сифаттары һаҡланған ризыҡтарҙы һатып алырға тырышам, - тием һүҙҙе сәләмәтлек темаһына бороп ебәрергә тырышып, сөнки Раузабыҙ - медицина хеҙмәткәре, был өлкәлә берәй файҙалы мәғлүмәте менән уртаҡлашыр, моғайын, тигән өмөттә. - Хәйер, сәләмәт булыу өсөн дөрөҫ туҡланыу ғына етмәйҙер әле. Авторы хәтерҙә ҡалмаған, кемдер берәүҙең "Аҙыҡ-түлек тә, хатта дарыу ҙа кешене дауаламай" тигән һүҙҙәре иҫкә килеп төштө. Шул мәҡәләһендә ул кешене дауалаусы алты ҡағиҙә хаҡында яҙғайны...*

- Һин, моғайын, яман шеш сиренән үҙен-үҙе һауыҡтырған Майя Гогуландың мәҡәләһенә тап булғанһыңдыр, - ти Рауза.- Был авторҙы хәҙер белмәгән кеше юҡ шул, китап магазиндарында бестселлерҙары тулып ята. Күберәк яман сиргә юлыҡҡандарға кәңәштәр бирһә лә, үҙен сәләмәт иҫәпләгән киң ҡатлам уҡыусылар өсөн дә китаптары бар уның. Япон профессоры Кацудзо Ниши тәғлимәтенә таянып, Майя дарыуһыҙ дауаланыу, күп сирҙәрҙе иҫкәртеү юлдарын өйрәтә. Әлеге һин әйткән алты алтын ҡағиҙәнең бөтәһендә лә сәләмәтлеккә умыртҡа бағанаһына тәьҫир итеү аша өлгәшеү маҡсат итеп ҡуйыла: тигеҙ ҡаты түшәктә баш аҫтына бәләкәй генә ҡаты яҫтыҡ (валик) һалып йоҡлауҙың организмдың бөтөн эшмәкәрлегенә лә туранан-тура йоғонто яһауын, көнө буйы тупланған шлактарҙы ҡыуҙырыуын, ҡан йөрөшөн яҡшыртыуы хаҡында белмәй инем әле. Умыртҡа бағанаһын кәкерәйеүҙән һаҡлау, турайтыу буйынса күнекмәләр - сәләмәтлек юлында ярты уңыш. Юҡҡа ғынамы ни ҡытайҙарҙа "Арҡаң төҙ икән, тимәк, һин йәш һәм сәләмәт," тигән әйтем йәшәй. Ҡағиҙәнең ҡалған дүрт пункты - дөрөҫ тын алыу системаһы, йәғни һулыш гимнастикаһы, һауыҡтырыусы махсус күнекмәләр. Уларын китаптан йә Интернеттан уҡып өйрәнергә була. Һәр хәлдә, үҙеңә яраҡлы физик күнекмәләрҙе һайлап алып, көн дә ни бары 20-30 минутыңды йәлләмәҫкә кәрәклеген яҡшы беләбеҙ ҙә бит...

- Үҙең яһайһыңмы һуң шуларҙы, файҙаһы ысынлап та бар микән, әллә гонорар өсөн генә яҙалармы шул китаптарын ?- тип һорай ҡуйҙы табибәбеҙҙән Миләүшә.

-Пенсияға сыҡҡас, Алла бойорһа... - тине Рауза.

*- Ана шулай, яҡшы тормош, яҡты киләсәк алда әле, тип алданып китеп тик бара әҙәм балаһы. Унан ғүмер һуҡмағының ахырына яҡынлашыуын да һиҙмәй ҡала... -тип уфтанып ҡуйҙым.- Пенсияға сыҡҡанды көтөп йөрөр инем мин дә, сирләп кителмәһә. Ауырығас, тотондом китап-белешмәләр аҡтарырға. Ҡытайҙың бар донъяға билдәле легендар Шаолинь мәктәбе остазы Вон Кью Киттың ҡасандыр һатып алынған "Цигун сәнғәте" тигән бестселлеры ятҡан үҙемдә. Ябай методик ҡулланма ғына түгел, хазина булып сыҡты ул. Цигун магистры ҡытайҙарҙың быуаттар буйы сер итеп һаҡланған йыһан энергияһы, сәләмәтлек, йәшлек һәм оҙон ғүмер сығанағы - махсус күнегеүҙәр һәм уларҙы яһау ысулдарын ентекләп төшөндөрә. Башлап шөғөлләнеүселәр өсөн иң тәүҙә бөтөн цигун тәғлимәтенең төп нигеҙен тәшкил итеүсе ике генә күнекмәһен өйрәтә ул. Тәү ҡарашҡа бик ябай тойолһа ла, уларҙы яһауы еңелдән түгел, сөнки был тәңгәлдә ихтыярың менән идара итеү, эске торошоңдо көйләү һәләте, дөрөҫ һулыш алыу системаһын үҙләштереү кәрәк. Ғөмүмән, бөтөн дарыуһыҙ һауыҡтырыу системалары ла бына ошо "өс кит"ҡа бәйле лә инде.*

- Ул тиклемен кем белһен, минең өсөн эргәләге дамба юлына сығып йүгерһәм дә ҙур файҙа,- тип бүлдерҙе һүҙемде Миләүшә. - Тик шуны ғына ла көндәлек ғәҙәткә әйләндереп булмай: иртә таң менән ҡырҡ мәшәҡәт һағалай. Аш-һыу яраштырып, эшкә ашығаһыңмы, ейәнсәрҙе баҡсаға илтәһеңме...

- Яҡшы ғәҙәтте көндәлеккә әүерелдерәм, тиһәң, иртәрәк тораһың инде, әхирәт, - тип йомғаҡлай был темаға һөйләшеүҙе табибәбеҙ. - "Булдырам!" тиһәң дә, "Минән булмай ул" тиһәң дә ике көйләнеш тә үҙ юлын таба һәм бойомға аша. Шуның яҡшыһын һайлайыҡ һуң, әйҙә. Үҙ-үҙеңде һауыҡтырыу системаһының бөтөн асылы шуға ҡоролған да инде: ихтыярыңды туплай алһаң ғына һиңә бер ниндәй сир ҙә яҡын юламаҫ.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА**
**яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Ҡорбан комплексынан нисек ҡотолорға

**Һеҙ нисек үҙегеҙҙе ҡорбан итеп тоя башлайһығыҙ һәм бының менән нисек көрәшергә?**

"Светофорға килеп кенә еткәйнем, автобусым үтеп китте", "Сиратым килеп еткәйне, тауар бөттө лә ҡуйҙы", "Эшкә урынлашам тигәйнем, бер көн алда ғына кеше алып өлгөргәндәр"... Был фразаларҙы нимә берләштерә? Улар барыһы ла кешеләрҙең позицияһын белдерә. Был һүҙҙәр тәү ҡарауға төрлө кеүек күренһә лә, уларҙың һәр ҡайһыһы билдәле типтағы: үҙенең кәмселегенән яфа сиккән, үҙбаһаһы түбән булған һәм һәр саҡ кире һөҙөмтә көткән кешене билдәләй. Әммә уларҙы берләштереүсе төп сифат - ул уларҙың үҙҙәренең ҡорбан булыу тойғоһона йәбешеп ятыуы һәм ошонан ҡәнәғәтлек алыуы. Бындай бәндәләр үҙҙәренең бәхетһеҙлеге хаҡында һөйләргә ярата. Әлбиттә, улар үҙ ирке менән ҡорбандар һәм, моғайын да, аңлы рәүештә ошо юлды һайлағандар.

Ләкин ҡорбан булырға һәм шул уҡ ваҡытта тормошта уңыш ҡаҙанырға мөмкин түгел. Әгәр үҙегеҙҙе ҡорбан тип күреп, был образды тирә-яҡтағыларҙың аңына һеңдерһәгеҙ, үҙегеҙ үк тормошоғоҙҙо ҡаралтаһығыҙ.

Моғайын, мөхәббәтте кире ҡағаһығыҙҙыр, бәхетте ситкә этеп ҡуяһығыҙҙыр, үҙегеҙгә ауырыу саҡырып килтерәһегеҙҙер, эшегеҙҙә уңышһыҙлыҡ көтәһегеҙҙер һ.б. Ә тирә-яҡтағыларға инде уңышһыҙлыҡтарығыҙ тураһындағы тарихты шундай итеп һөйләйһегеҙ, хатта үҙегеҙ үк ошо уйлап табылған тарих ҡорбанына әүерелгәнегеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалаһығыҙ. Әгәр проблемаларығыҙҙы психотерапевҡа түгел, ә таныштарығыҙға һөйләйһегеҙ икән - бары тик үҙегеҙҙең ҡорбан комплексын өҫтәмә туҡландыраһығыҙ ғына. Ә бит унан арынырға ла мөмкин...

Ни өсөн күп кеше үҙен ҡорбан итеп тойған хәл-торошҡа теше-тырнағы менән йәбешеп, унан ҡотолорға тырышмай? Сәбәптәре ябай:

- Улар һәр ваҡыт үҙҙәренең уңышһыҙлығында кемделер ғәйепләй һәм үҙҙәрен шуға инандыра.
- Барлыҡ уңышһыҙлыҡтар тышҡы факторҙарға бәйле булыуы уларҙы яуаплылыҡтан азат итә.
- Улар тирә-яҡтағыларҙың иғтибарын, йәлләүен йәлеп итә.
- Ошо иғтибарҙы һәм йәлләүҙе үҙҙәренә ҡарата булған мөхәббәт тип ҡабул итәләр.
- Шәхси тормоштарындағы уңышһыҙлыҡты тағы ла кем менәндер хис-тойғоға бай бәйләнеш булдырыуға һәләтһеҙлектәрен раҫлау тип ҡарайҙар.
- Юғары маҡсаттарға ынтылыу һәм перспективалы проекттарҙы тормошҡа ашырырға тырышмауҙарын быға тиклем булған уңышһыҙлыҡтары менән аҡлайҙар.
- Уңыш ҡаҙаныр өсөн тейешле белемдәре һәм кәрәкле бәйләнештәре юҡ тип иҫәпләйҙәр.
